ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15-21 июнь (һөтай) 2019

№24 (858)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Ҡурҡып йүгергәнде күргән дошман һине тағы ла нығыраҡ эҙәрлекләйәсәк. Шуның һымаҡ, сир алдында ҡурҡып ҡалһаң, ул һине тағы ла нығыраҡ ыҙалаясаҡ. Ҡаршылыҡ булһа, йомшарасаҡ. Сиргә ҡаршылыҡ күрһәтергә кәрәк. (М. Монтень).*


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Балалар ял итә



5

Оло ҡорҙан...



оло эштәр көтөп 8-9

Баймаҡтарса булды!



11

"Эскесе булып тыумайҙар, балам..."



12-13

ТВ-программа 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ә һеҙ бөгөн, ниндәй телдә нәшер ителеуенә ҡарамаҫтан, бөтә матбуғат баҫмаларының да ҙур ауырлыҡтар кисергәнен беләһегеҙме?

***Мәхмүзә ИСЛАМҒОЛОВА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, Баймаҡ районы Ярат ауылы әбинәйе, "Киске Өфө" гәзитенең тоғро дуҫы:*** Белмәй буламмы! Ошондай күренешкә күңелем һыҙлағандан үҙем тотоноп киттем бит ауылдаштарға матбуғат баҫмалары таратыуға. Аҡсаларын һорап алам да, почтаға барып гәзиткә яҙҙырам. Бер кем миңә был эште ҡушманы - намыҫым ҡуша. Бөтәһенә лә оҡшап та етмәйҙер, бәлки, минең шундай ғәҙәт, тип әйтәйемме... Бының өсөн миңә бер кемдән дә бер ни ҙә кәрәкмәй. Мин оло йәштәмен хәҙер, 85 менән барам - аҡса ла, бүләк тә кәрәкмәй, фәҡәт ауылдаштарымдың мине аңлауы, әсә телебеҙгә битараф, һалҡын мөнәсәбәттә булмауы кәрәк. Әйе, үҙемсә яҡшы ғәҙәт кенә түгел, изгелекле ғәмәл дә башҡарам, тип уйлайым. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк: ауыл кешеһенең аҡсаһы ла булмай китә, ләкин ярты йылға 500 һумын сығарып һалырлыҡ ҡына хәлдәре булғандар мотлаҡ яҙылырға тейеш башҡорт матбуғатына. Был бит уларҙың үҙ балаларының киләсәгенә һалған маяһы буласаҡ. Балаларыбыҙ милли рухыбыҙҙан айырылмаһын, үҙ йолаларыбыҙҙы тотоп, үҙ еребеҙҙә үҙҙәре хужа булып, үҙ телебеҙҙә һөйләшеп-аралашып бәхетле йәшәһендәр, тиһәк, балаларҙы телһөйәрҙәр итеп тәрбиәләйек. Телһөйәрлектән илһөйәрлек хисе тыуа - бына бит мәғәнә ҡайҙа! Телен белмәгән үҙ ерендә лә ҡамғаҡ булып, килмешәк рәүешендә яфа сигер: теленән дә, иленән дә яҙыр, Алла һаҡлаһын! Мәсьәлә етди тора: илебеҙҙе һаҡлайыҡ, тиһәк - телебеҙҙе һаҡлайыҡ. Ошо юҫыҡта һөйләшеп, аңлатырға кәрәк кешегә - бер кем дә тартҡылашып тормаясаҡ. Мәленә ҡарап, әмәлен һайлайым бына мин дә. "Мәхмүзә апай хәҙер гәзиткә яҙҙыра ул", тип ҡасып ҡалыусылар, минең күҙгә салынмаҫҡа тырышып йөрөгәндәр барлығын да белеп-ишетеп торам, тик мин уларға үпкәләмәйем, бары уларҙы йәлләйем генә: йомшағыраҡ итеп әйткәндә, маңҡортлоҡҡа, наҙанлыҡҡа ҡаса бит улар... Хәлемдән килһә, бөтәһенә лә бушлай яҙҙырыр инем дә бит. Үҙегеҙ аңлайһығыҙ: ундай мөмкинлек юҡ. Шулай ҙа киләсәктә ауылдың хәлле эшҡыуарҙары менән был юҫыҡта һөйләшеп-кәңәшләшеп ҡарау кәрәктер, тейем: аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә матбуғат баҫмалары яҙҙырыу бик урынлы мәрхәмәтлек сараһы булыр ине. Әйткәндәй, туғандарға, дуҫ-иштәргә шулай ҙа тыуған көндәренә бүләк итеп "Киске Өфө", "Һаҡмар", "Атайсал" гәзиттәрен, "Ағиҙел" журналын яҙҙырғылайым. Ҡайһы саҡ ер һөрҙөрөү, бесән эштәрендә ярҙамлашҡан ауылдаштарыма түләй торған аҡсаға уларҙы гәзиткә яҙҙырыуҙы хуп күрәм, риза булалар, рәхмәт яуғырҙар, береһе лә юҡ, кәрәкмәй, тимәй. Унан һуң, ҡайһы кешенең эшен ташлап, махсус рәүештә почтаға барып, гәзиткә яҙылып йөрөргә ваҡыты ла булмай. Аҡсаһын һорап алып, почтаға барам да яҙҙырам. Шулай бер көн почтала эшләүсе Әнисә һылыу Юлғотлина үҙемде район гәзитенә яҙҙырып, аптырашта ҡалдырҙы. "Ни өсөн?" тигән һорауыма: "Матбуғат таратыуҙа ярҙамың өсөн рәхмәт йөҙөнән", - ти. Бына шулай, бер-береңә ҡыуаныс килтереп, бер-береңә рәхмәтле булып йәшәүгә етәме һуң инде. Күп йылдар башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләнем һәм хаҡлы ялға сыҡҡас, матбуғат баҫмалары менән бәйләнеште нығытырға форсат тыуҙы шулай. Шиғыр уҡырға яратам, йөрәккә үткәндәрен тыныс ҡына уҡый алмайым, илай-илай уҡыйым. Һүҙҙең көсөнә инанып йәшәйем ғүмер буйына, бына шул һүҙ ҡеүәте, һүҙ тылсымы дуҫлаштырҙы ла инде мине үҙ телемдәге матбуғат баҫмалары менән. Гәзит уҡыған кешене һөйләшеүенән, үҙен тотошонан таныйым: кәрәген генә тейешле итеп әйтә белә, хәл-ваҡиғалар, яңылыҡтар менән һәр саҡ хәбәрҙар. Мәҙәнилектең бер сағылышы ул - гәзит-журнал алдырып уҡыу.

**(Дауамы 2-се биттә).**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

## ӨФӨБӨҘҘӨҢ... сәғәт-фонтаны бар!

**Рәсәй һәм Ҡала көнөндә Өфөлә күптән көтөлгән сәғәт-фонтан асылды. Гидродинамик фонтан сәғәт-һауыт формаһында эшләнгән. Фонтандан һыу төрлө бейеклектә ата, иң бейек ағым ваҡытты күрһәтә. Ул төҫлө уттар менән биҙәлгән, шулай уҡ музыкаһы ла уйнай. Яңы объектты асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров та ҡатнашты. Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин Ленин исемендәге майҙандың быға тиклем дә халыҡтың яратҡан урыны булыуын, сәғәт-фонтан иһә халыҡты үҙенә тағы ла нығыраҡ тартып торасағын билдәләне.**



12+

ИҒТИБАР!

**2019 йылдың икенсе яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу тамамланып бара. Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Хаҡтар шулай: 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 624 һум, абонент йәшнигенә - 594 һум 06 тин; Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I-II группа инвалидтары өсөн - 563 һум 40 тин, абонент йәшнигенә - 539 һум 46 тин.**

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

• Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек. Берҙән, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға. Икенсенән, уҡыусыларыбыҙға даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торабыҙ икәнде беләһегеҙ. Был юлы гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер **"Башкиры"; ЗөлфиәХаннанованың "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ..."; Фәүзиә Усманованың "Бөрйән йөрәге" (Беренсе китап; Икенсе китап), "Башҡорт халыҡ ижады" (мөнәжәттәр), Рәшит Шәкүрҙең "Йөрәктәге яҙмалар", Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре" кеүек матур баҫмалар һәм Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы фонды аудиокитабы** менән бүләкләнер. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә гәзит аша ҡотланыр өсөн тыуған көндәрен хәбәр итһен.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

• Баш ҡала халҡы йәшәгән йорто эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыларында баҫмабыҙға 522 һумға яҙыла ала.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға 312 һум.

• Коллектив менән яҙылыусыларға (кәмендә 5 дана) гәзит ярты йылға шулай уҡ 312 һумға төшәсәк, уларға баҫманы редакция үҙе килтереп бирәсәк.

**Почтальондар иғтибарына!** Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.

**Әйҙәгеҙ, хөрмәтле йәмәғәт, "Киске Өфө"гә лә берҙәм генә яҙылып алайыҡ. Беҙҙең тираж баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон ғына түгел, ә уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, шулай уҡ милләтебеҙҙең аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе билдә икәнен онотмайыҡ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ә һеҙ бөгөн, ниндәй телдә нәшер ителеүенә ҡарамаҫтан, бөтә матбуғат баҫмаларының да ҙур ауырлыҡтар кисергәнен беләһегеҙме?



(Башы 1-се биттә).

***Ғайса ШӘМСЕТДИНОВ, журналистика ветераны:*** Матбуғат баҫмаларының бөгөнгө ауыр хәле беҙҙең республика йә тотош ил буйынса ғына түгел, донъя күләмендә күҙәтелә. Уларҙың тираждары кәмей, ҡайһылары нәшер ителеүҙән туҡтай, гәзит-журналдар күпләп үҙ уҡыусыларын юғалта - ҡыҫҡаһы, матбуғат баҫмаларының онлайн мәғлүмәт саралары тарафынан ҡыҫырыҡланыуы кире ҡайтарғыһыҙ күренешкә әйләнә бара. Тәү ҡарашҡа, бер ни эшләп тә булмай кеүек: тормошобоҙ тотошлайы менән һанлы форматҡа күсә. Бындай шарттарҙа айырыуса милли матбуғат баҫмаларының хәле мөшкөлләнә. Башҡорт телен дәүләт теле итеп рәсми йәшәтеү һәм үҫтереү сығанаҡтарының береһе булараҡ, гәзит-журналдарҙы ябылыуҙан һаҡлап алып ҡалыу мәсьәләһе көн тәртибенә ҡуйыла бөгөн. Дәүләт әһәмиәтендәге мәсьәлә был, тимәк, республика Хөкүмәте тарафынан, федераль кимәлдә матбуғат сараларына сығымдарҙы сикләү сәйәсәтенә ҡарамаҫтан, милли матбуғат баҫмаларын яҡлау һәм һаҡлау йүнәлешендә кисекмәҫтән аныҡ саралар күрелергә тейештер, сөнки бынан алдағы оптималләштереү тигән "нәмә" яҡшы яҡҡа бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр бирмәне, киреһенсә, ул журналистарҙың эш хаҡын кәметеүгә һәм редакция хеҙмәткәрҙәрен ҡыҫҡартыуға ғына ҡайтарып ҡалдырылды. Яңылыҡ - ул онотолған иҫке хәҡиҡәт тиҙәр. Шуның кеүек, ҡайһы бер баҫмаларҙы бөлөүҙән ҡотҡарыуҙың үҙемсә бер нисә юлын күреүем хаҡында әйтеп китергә кәрәктер, тим. Элегерәк теге йәки был ведомствоның үҙ баҫмалары нәшер ителә ине. Шул традицияны тергеҙеүҙән юҡҡа сығыу алдында торған ҡайһы бер милли баҫмаларыбыҙҙы ла һаҡлап ҡалырға мөмкин булыр ине, бәлки. Мәҫәлән, мәктәп йәшендәге балалар һәм үҫмерҙәр өсөн баҫмаларҙы - БР Мәғариф министрлығы, тарих һәм мәҙәни йүнәлештәге гәзит-журналдарҙы - Мәҙәниәт министрлығы, үҙ тематикаһы буйынса баҫмаларҙы Ауыл хужалығы министрлығы һәм башҡа шулай ведомстволарҙың баҫмаларҙы үҙ ҡанаты аҫтына алыу мөмкинлеген күҙалларға булыр ине, тимәксемен. Икенсенән, беҙҙең республикала, шөкөр, башҡа төбәктәргә ҡарағанда матбуғат баҫмалары һаны байтаҡ ҡына иҫәпләнә. Улар араһында тематикалары, йүнәлештәре яғынан бер-береһен ҡабатлағандары ла бар. Ана шундай гәзит йә журналдарҙы бер исем аҫтында бер баҫмаға берләштереү вариантын ҡарарға булыр ине һис юғы. Был тәҡдим күптәргә оҡшап та етмәҫтер, шуға ла был йәһәттән бик уйлап эш итеү фарыз. Нисек кенә булмаһын, быуаттан ашыу тарихлы башҡорт матбуғатының бөгөн бөлөп юҡҡа сығыуына юл ҡуйылһа, тарих беҙҙе ғәфү итмәҫ.

***Фәтиха ИШБИРҘИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Хәтерләгеҙ әле: заманында тотош милләткә лә бөлөү, үлеп бөтөү хәүефе юраған бит пессимист әҙәмдәр. Әммә шул халыҡ бөгөнгө көнгә тиклем бына тигән йәшәп ята әле, иншалла, артабан да йәшәр. Әлбиттә, саң ҡағыу, йәмәғәтселектең генә түгел, дәүләт органдарының да иғтибарын был мәсьәләгә йәлеп итеү кәрәк. Ошо хаҡта һүҙ сыҡһа, бәғзе берәүҙәр, беҙҙә генә түгел, ана, Америка, Англия, Францияла ла гәзиттәр шундай уҡ бөлгөнлөк алдында тора, тип "йыуана" башлай. Әммә беҙҙең уларҙа ла, Ҡаф тауҙары арьяғында ла эшебеҙ юҡ. Башҡортостан йәшәй икән, башҡорт телендә уҡыусылар бар икән, гәзиттәребеҙ ҙә йәшәргә тейеш. Тираждар кәмей, әлбиттә, баҫма матбуғат интернет-технологиялар ҡыҫымында ҡалды, ләкин һанлы матбуғат ҡаныбыҙға һеңгән үҙ традициялары, үҙ өҫтөнлөктәре булған "ҡағыҙ" матбуғатты "йота" алыр, тип уйламайым. Онлайн матбуғат саралары күберәк ашығыс һәм күп осраҡта тикшерелмәгән, "ҡыҙҙырылған" мәғлүмәттәр бирергә әүәҫ. Күп мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөндә икеләнергә тура килгәне һәм был икеләнеүҙәрҙең раҫҡа сыҡҡаны ла бар. Баҫма матбуғаттың, әйтеүемсә, быуаттан ашыу тарихы, шунсама йылдар буйы ҡаҡшамаған абруйы, шулай уҡ тоғро уҡыусылары бар. Улар әҙ, ләкин, эксперттар ҡылыҡһырлауынса, улар йәмғиәттең өҫтөнлөклө, "элиталы" уҡыусылары. Гәзит уҡыусы хәҙер үҙенең ошо шөғөлө, ошо яҡшы ғәҙәте менән асылда үҙенең мәҙәни һәм дә аҡыл кимәлен сағылдыра. Әлбиттә, журналистар ошо матур ғәҙәттең онотолмауын, элекке йылдарҙағы кеүек, гәзит уҡыусылар сафының арта барыуын теләй. Бының өсөн, әлбиттә, хәҡиҡәткә тоғро, объектив, йөкмәткеле баҫма сығарырға кәрәк. Матбуғат баҫмалары күптән инде үҙ көндәрен үҙҙәре күрергә, үҙ йүндәрен үҙҙәре йүнләргә күнекте, ә шулай ҙа дәүләт ярҙамына мохтаж гәзиттәребеҙ. Журналистар бит баҫмаларҙы үҙҙәре өсөн сығармай. Башҡорт халҡын һәм башҡорт телен тергеҙеү һәм үҫтереү буйынса дәүләт программаларында, туған телебеҙҙе рәсми йәшәтеү сараһы булараҡ, башҡорт матбуғатын да яҡлау, үҫтереү тураһында айырым әйтелергә һәм был пункттар үтәлергә тейеш.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Стратегик башланғыстар агентлығы 2019 йылдың йомғаҡтарын иғлан итте. Башҡортостан Рәсәй Федерацияһы төбәктәрендә инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингында, уҙған йыл менән сағыштырғанда 7 пунктҡа күтәрелеп, 16-сы урынды алды. Иң юғары рейтинглы төбәктәр иҫәбендә - Мәскәү, Татарстан һәм Төмән өлкәһе. Шулай уҡ быйыл тәүге унауға яңы төбәктәр - Калуга, Белгород һәм Ленинград өлкәләре инде.

✓ Бөрйән районы 8-9 июндә V "Ҡаяға төшөрөлгән сәнғәт ҡомартҡыларын музейлаштырыу: теория һәм практика" Халыҡ-ара симпозиумын ҡабул итте. Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙең табылыуына 60 йыл тулыуға арналған сарала Мәскәү, Санкт-Петербург, Кемерово, Екатеринбург ғалимдары, шулай уҡ сит ил белгестәре ҡатнашты. Сара барышында "ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә дәғүә итеүгә юл: проблемалар һәм мөмкинлектәр" түңәрәк өҫтәле ойошторолдо. Уның маҡсаты - "Шүлгәнташ мәмерйәһе рәсемдәре" объекты менән идара итеү планын тикшереү.

✓ 2020 йылдың 1 ғинуарындағы индексациянан һуң әсәлек капиталының суммаһы 470 мең һум тәшкил итергә тейеш. Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Максим Топилин ошо турала хәбәр итте. Илдә программа Рәсәй Президенты Владимир Путиндың указы буйынса 2007 йылдан эшләй башланы. Ул 2021 йылдың аҙағына тиклем оҙайтылды. Сертификат икенсе йәки артабанғы балалар тыуған осраҡта бирелә. Бөгөнгә Рәсәйҙә әсәлек капиталының күләме 453 мең һум тәшкил итә.

✓ Илшат Әминев Архангел районы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде, тип хәбәр итте республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров. 2012 йылдан районды етәкләгән Александр Комзалов отставкаға китте. Ә Мишкә районы башлығы итеп Павел Трапезников тәғәйенләнде.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Матди байлыҡҡа бер ни менән дә сикләнмәгән юлдар аша эйә булырға ынтылыу, әҙәп-әхлаҡ ҡанундарын һанға һуҡмау, башҡаларҙан өҫтөн, юғары кастаға эләгергә тырышыу бер кемде лә биҙәмәй.*



УЙЛЫҒА - УЙ

**Замандаштарыбыҙҙың байтағы совет дәүерендә тыуып үҫкән, белем алған, һөнәр үҙләштергән, ғаилә ҡорған, һәм ул осор барыбыҙҙың да хәтерендә мәңге юйылмаҫ эҙҙәрен ҡалдырған. Бөгөн ул саҡтарҙы юҡһынып-һағынып иҫкә алғандар менән бер ҡатар шул ваҡытты, уға яраҡлашып көн иткәндәрҙе, уның барса ҡанундарын, ҡиммәттәрен, хатта ҡаҙаныштарын хурлаған, йәне-тәне менән күрә алмағандар ҙа бихисап. Былары тәүгеләрен мыҫҡыллап, совоктар, коммунистик идеология ҡорбандары, меҫкен, ирекһеҙ замана ҡолдары, тип атауҙан һис тартынмай бөгөн. Әйтерһең дә улар башҡаса йәшәгән, ысын ҡиммәттәргә эйә булған да бүтән илаһҡа табынған...**

# ЯҠШЫНЫ...

## яманға алыштырамы заман?

Әҙәм балаһы барыбер үткәндәрҙән, шәхсән кисерелгәндәрҙән азат түгелдер. Хәҙергене ҙурлар, үткәнде яманлар өсөн дә йәшәйеш факттарын сағыштырып ҡарамайынса, ысынбарлыҡҡа тап килгән һығымтаға килеп булмай. Шулай булғас, факт һәм аргументтарҙы барлап, бер элеккене, бер хәҙергене баһалап ҡарайыҡ.

Беҙ, Бөйөк Ватан һуғышынан аҙаҡ, үткән быуаттың 50-се йылдарында Башҡортостан ауылдарында донъяға килгән быуын, ошо осорҙоң ысын балалары булып, тыуып үҫкән мөхитебеҙгә ерегеп, уның тәбиғәтенә һоҡланып, йәш үҫмерҙәргә генә хас ихласлыҡ менән дуҫлашып, ауылдаштарыбыҙға ылығып үҫтек. Ейән ризыҡтарыбыҙ бер төрлөрәк, өҫ кейемдәребеҙ ҙә ауылсараҡ, наҡысыраҡ булһа ла, тыуған ауылыбыҙҙан да яҡшыраҡ, яҡыныраҡ, матурыраҡ башҡа ер юҡтыр, тип иҫәпләй инек. Ауылдарҙа тормош гөрләп торҙо, әрме хеҙмәтенән ҡайтҡандар өйләнешеп, ғаилә ҡороп, тормош усаҡтарын һүндермәй йәшәй ине. Тырышып эшләгән ауылдаштарыбыҙ маҡталы булды, орден-миҙалдарға, заманына ҡарата ҡиммәтле генә бүләктәргә лайыҡ булды. Ауылдашлыҡ, яҡташлыҡ тойғолары, кешеләрҙе бер-береһенә яҡынлаштырып, туғанлаштырып, уларҙы бер ҡорға туплаусы көскә әүерелде. Кем быны инҡар итергә баҙнат итер?

Әлеге йәшәйешебеҙҙә элеккене юҡҡа сығарған ҡанундар өҫтөнлөк алды. Улар бәләкәйерәк ауыл-ҡасабаларға үлемесле хөкөм ҡарарын сығарҙы. 1990 йылға тиклем Рәсәйҙә 150 меңдән ашыу ауыл иҫәптә булһа, яңы осорҙа уларҙың 34 меңе юҡҡа сыҡты, ә 10 меңдән ашыу ауылда ни бары 10-дан да кәмерәк кеше йәшәй. Прогноздар буйынса, илдә 2030 йылға тиклем тағы ла 40-50 мең ауылдың бөтөүе ҡуҙаллана. Башҡортостанда хәл ул тиклем үк катастрофик булмаһа ла, бәләкәй башҡорт ауылдарына ла шул уҡ хәүеф янай. Хәҙер бит ауылдарыбыҙҙа күмәкләп эшләр предприятиелар күптән тарҡатылып, юҡҡа сыҡҡан, байтағында мәктәптәр, клубтар, библиотекалар, ФАП-тар ябылған, йәштәр күпләп сит-ят ерҙәргә китә. Ауылдарыбыҙҙың ҡороуы - туған телебеҙ, фольклорыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ өсөн һис ни менән алыштырғыһыҙ юғалтыу ул. Элек ҡыйын ине, хәҙер йәшәү анһат ул, тип әйтергә телебеҙ барырмы?

Уйҙар, бөтмәҫ-төкәнмәҫ уйҙар... Бына, башҡорт телен яҡлайыҡ-һаҡлайыҡ, тип ыҙа сигәбеҙ. Ә үҙебеҙ заманында саф башҡортса урта белем алып, профессиональ уҡыу йорттарында рус телендә лә төрлө һөнәрҙәр үҙләштерә алдыҡ бит. Үткән заман быға шаһит. Башҡорт телендә уҡытыу тамам юҡҡа сығып бара, дәүләт ҡанундары туған телдәрҙе уҡытыуҙа сикләүҙәр индерә, ошо юҫыҡта закон боҙоусыларҙы эҙләү, яуаплылыҡҡа тарттырыуға тиклем барып еттек. Беҙҙең быуындың телле иткән заман яманмы ла, телһеҙлекте хуп күргән яңы дәүер хаҡлымы?

Уҙған быуаттың 60-сы йылдары башында ауылыбыҙ кешеләрен тетрәндергән, шаҡ ҡатырған бер ваҡиға иҫтә ҡалған. Германияла әсирлектә йөрөп ҡайтҡан, балта оҫтаһы булып танылған оло ғына бер ағай үҙ-үҙенә ҡул һалған ине. Күрәһең, әсирлектең ҡара мөһөрө, эскегә әүәҫлеге йә башҡа бер сәбәптәр арҡаһында ул кеше йәшәү мәғәнәһен юғалтҡан булғандыр. Әммә ауылыбыҙҙа оҙаҡ йылдар буйына был дайы фажиғә ҡабатланманы. Тик киреғә ҡайтарылған капиталистик ҡоролош бәләкәй бер ауылыбыҙҙан ғына ла тиҫтәләгән йәш кеше йәнен суицид ҡорбаны итеп, кемдәндер гәзиҙәрен ер аҫтына тыҡты. Дингә лә тыйыу юҡ, цифрлаштырылған йәмғиәткә юл алдыҡ, тип лаф орабыҙ, шул уҡ саҡта республикабыҙ суицидтың ҡара рейтингында алға сыҡты. Ни өсөн цивилизацияға бара торған юлда шундай өмөтһеҙлеккә тарыған кешеләр ишәйә бара?

Хәҙер телевизорҙан сығыш яһаусы ҡайһы бер сәйәсмәндәр, совет осоронда бер ниндәй ҙә халыҡтар дуҫлығы булманы, ул бары тик агитпроп уйҙырмаһы ине, тип сафсата һата. Тик беҙҙең йәшлек йылдарында милләтара татыулыҡ та, үҙ-ара килешеп йәшәү бөтөн илгә хас сифат булды. Шәхсән Мәскәү ҡалаһында уҡыған йылдарым хәтирәләремдә тиҫтәләгән милләт вәкилдәренең дуҫтарға ғына хас матур һындары әле лә йәшәй. Ни өсөн һуң баҙар мөнәсәбәттәрен алға һөрөү милли төҫтәргә буялған низағтарға юл асты, асыҡтан-асыҡ дошманлашыу процестары халыҡ күңелен ҡара һөрөмгә батырҙы?

Ҡасандыр коллектив тигән төшөнсәнең барыһына ла яҡын, аҫыл асылы булып, ошондай берлөшмәләргә ойошҡан кешеләрҙә бер-беренә ҡарата матур хистәр, изге уйҙар тыуҙыра, теләктәшлек, ярҙамсыллыҡ, дөйөм яуаплылыҡ тойғоларына ерлек бирә ине. Бөгөн кеше күңеленә эгоизм, индивидуализм ояланы, кеше ҡайғыһы төштән кире принцибы өҫтөнлөк итә, хатта үҫешкән корпорацияларҙа ла һәр кем үҙ көсөнә генә таянып эш итә ала. Тотош йәмғиәтте атомлашыу, йәғни, һәр кемдең айырым күҙәнәк рәүешендә йәшәүе ҡанунлаша бара. Халҡыбыҙҙың айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре быуыр, тигән аманаты юҡҡа сыҡтымы ни?

Элек тә уғрылыҡ, енәйәтселек күренештәре бар ине. Әммә идаралыҡ итеү, хоҡуҡ һаҡлау, юғары власть даирәләрендә был үтә лә һирәк осрай ине. Бөгөн аҙна һайын булмаһа ла, ай һайын йә тегендә, йә бында иң юғары вазифалар биләүсе әҙәмдәр ҡулға алына, уларҙың миллионлаған, миллиардлаған һумлыҡ енәйәти юл менән йыйылған аҡсалары табыла. Улар ҙа бит кем тарафынандыр оло вазифаларға тәғәйенләнгән, уларҙың уғрылығын кемдәрҙер йомоп-йәшереп торған даһа! Коррупцияны тар-мар итәбеҙ, тигән лозунгылар гел яңғырап тора юғары трибуналарҙан, ә ул дәүләтте, йәмғиәтте пыранзаран килтерергә һис бер ҡурҡыуһыҙ, иркенләп тотонған. Был ҡасанға тиклем дауам итер?

Элек барса халыҡ хупламаған, үҙ тормошонда ҡулланған ҡиммәттәрҙе юҡҡа сығарып, улар урынына ялғандарын, үҙҙәрен барыһынан да өҫтөнөрәк итеп күргән ҡатлам мәнфәғәттәренә ҡулай булғандарын йәмғиәт аңына һеңдереү бына ошондай йәмһеҙ күренештәргә алып килде лә инде. Матди байлыҡҡа бер ни менән дә сикләнмәгән юлдар аша эйә булырға ынтылыу, әҙәп-әхлаҡ ҡанундарын һанға һуҡмау, башҡаларҙан өҫтөн, юғары кастаға эләгергә тырышыу бер кемде лә биҙәмәй. Ошондай ялған принциптарға таянып, алдынғы йәмғиәт тә төҙөп булмай. Дәүләтебеҙ үҫешһен, яңырыу кисерһен, тиһәк, тапалған, мәсхәрәләнгән ысын ҡиммәттәребеҙҙе ҡайтарайыҡ, шул саҡта ғына матди йәшәйеш етешлегенә лә, рух күтәренкелегенә лә, берҙәмлек-татыулыҡҡа ла өлгәшә алырбыҙ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# АҘ АШАМА - КҮП ЙӨРӨ!

**Ни сыҡһа, әлеге шул ябай халыҡтың көнкүрешенән алыҫ (әллә - юғары?) торған чиновник һәм депутаттарҙан сыға. Шулай уҡ туҙға яҙмаған хәбәрҙәр һәм айырыуса кәңәштәр ҙә.**

Халыҡты "макарошка" менән айына 3,5 мең һумға йәшәргә өгөтләүсе Һарытау министры вазифаһынан осоуға күп тә үтмәне, тағы ла шул меҫкен пенсионерҙың ашҡаҙанына ревизия яһала башланы. Был юлы илдең элекке Баш санитар табибы - Дәүләт Думаһы депутаты Онищенко әфәнде кемгә һәм нисек ашарға өйрәтеүе менән күптәрҙең һарыуын ҡайнатты: социаль селтәрҙәр менән файҙаланыусылар форумдарынан интернет дер һелкенеп торҙо. Ул тормоштоң әсеһен-сөсөһөн етерлек татыған сал быуын вәкилдәренә "саҡ-саҡ ҡына асығып" ("чуть-чуть впроголодь"), йәғни, беҙҙеңсә ауҙарғанда, аслы-туҡлы йәшәргә ҡуша. Юғиһә, ти ул, күп ашауҙан ҡарттар һимерә һәм күп сирҙәргә дусар була, имеш. Ҡыҙыҡ, хәҙер инде нисә йыллап өлкән быуындың ун мең пенсия аҡсаһына асыҡлап та аслы-туҡлы көн күреүе мәғлүм түгелме икән ни депутат әфәндегә? Өйрәтеп, аҡыллы кәңәштәрҙе әрәм итеп тороуҙың кәрәге лә юҡ хатта. Ошо көндәрҙә генә "Ромир" холдингы үткәргән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, рәсәйҙәрҙең дүрттән бер өлөшө самаһы аҙыҡ-түлеккә сығымдарын сикләргә мәжбүр, тип хәбәр итте рәсми сығанаҡтар. Икенсенән, өлкән йәштәгеләр үҙҙәре уҡ таныуҙарынса, олоғайған һайын ашау, аҙыҡ-түлеккә нәфсе тойғоһо былай ҙа һүрелә бара, ашауға бәйлелек кәмей. Унан һуң, эш күп йә аҙ ашауҙа ла түгел бит. Онищенко әфәнде үҙе уҡ таныуынса, оло йәштә матдәләр алмашыныуы һүлпәнәйә, шунлыҡтан, пенсионер ауыр эшкәртелеүсе ит ризыҡтарынан һәм ҡамыр аҙыҡтарҙан былай ҙа баш тартырға мәжбүр. Асылда иһә, эш рационды ярлылығы, бер төрләлөгөндә: икмәк, картуф, әлеге лә баяғы арзан макарон изделиеларына ғына етеп ҡала пенсия аҡсаһы. Ә инде ризыҡҡа, коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтарҙың көнләп түгел, сәғәтләп артыуы оло йәштәгеләргә "саҡ-саҡ ҡына" елҡ-емеш, йәшелсә һатып алыу өсөн артыҡ бер тин дә ҡалдырмай кеҫәлә. Ҡайҙа инде ул диетолог һәм гериатрҙар кәңәш иткән витаминдар менән ҡиммәтле "омега" майҙары!.. Финанс мөмкинлеге булһа, ябай пенсионер ҙа депутаттар һымаҡ уҡ лосось балығы, ҡара һәм ҡыҙыл ыуылдырыҡ ашап кинәнер ине. Көҙҙә ауырлығы ла артмаҫ, сирләп тә бармаҫ ине: картуф та макарон түгел бит инде был...

Ә шулай ҙа "батып барыусының ғүмере батып барыусының үҙ ҡулдарында": махсус физик күнегеүҙәр эшләп мөшкәтләнергә теләмәһәгеҙ, көн һайын ярты сәғәт булһа ла хәрәкәтләнеү, йәйәү йөрөүҙән дә организмға ҙур файҙа, ти белгестәр. Чиновниктарҙың аҙ ашарға саҡырған кәңәштәренән, дәүләткә матди ярҙам һорап инәлеүҙәрҙән, һәм, ғөмүмән, һәр төрлө ана шундай кәмһенеүҙәрҙән азат булам, бөтәһенә лә үс итеп оҙаҡ йәшәйем, тиһән...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Сауҙа буйынса дәүләт комитеты хеҙмәткәрҙәре һабантуй көндәрендә алкоголь һатыу-һатмауҙы тикшерә башланы, тип хәбәр иттеләр ведомствонан. Республикала 2019 йылдың 30 майынан күмәк халыҡ ҡатнашҡан байрамдарҙа спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйыу тураһында закон көсәмәлдә. Әйтәйек, 1 июндә 13 районда һабантуй ойошторолдо. Өфө, Ҡырмыҫҡалы, Благовещен, Илеш, Йылайыр районтарында хәмер һатыу осраҡтары асыҡланды. Уның өсөн магазин хужалары штраф түләргә тейеш: юридик берәмектәргә - 100 меңдән 300 мең һумға, вазифалы кешеләргә 20 меңдән 40 мең һумға тиклем.

✓ Башҡортостан" дәүләт концерт залын Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Вилдан Яруллин етәкләй. Республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова "Башҡортостан" дәүләт концерт залы коллективын яңы директор менән таныштырҙы. Мәҙәниәт министрлығы сайтында хәбәр ителеүенсә, Вилдан Яруллин министрлыҡ ойоштторған республиканың төп концерт майҙансығы етәксеһе вазифаһына конкурста ҡатнашты. Конкурс йомғаҡтарына ярашлы, комиссия Вилдан Яруллинды енеүсе тип билдәләне. Һуңғы йылдарҙа "Башҡортостан" дәүләт концерт залына Алмаз Сәйетов етәкселек итте.

✓ Быйыл Башҡортостанда "Һаулыҡ һаҡлау" милли проекты сиктәрендә онкология сирҙәре менән көрәшкә 1,8 миллиард һумдан ашыу йүнәлтелә. 2019 йылда онкология сирҙәре менән көрәш буйынса төбәк программаһы әҙерләнергә, уның сиктәрендә дүрт амбулатор онкология ярҙамы үҙәге эшләй башларға тейеш. Улар Өфө, Октябрьский, Нефтекама һәм Күмертау ҡалаларында күп профилле дауаханаларҙа ойошторола. Шулай уҡ республика онкология диспансерын, өҫ медицина ойошмаһын диагностикалау һәм дауалау медицина ҡорамалы менән йыһазландырыу, 67 берәмек махсус техника һатып алыу күҙаллана.

✓ 2019 йылдың биш айында Башҡортостанда 17 593 сабыйҙың тыуыуы теркәлгән. Республиканың туғыҙ - Саҡмағош, Аҫҡын, Стәрлетамаҡ, Илеш, Әлшәй, Күгәрсен, Дыуан, Йәрмәкәй, Өфө районтарында тыуыу тураһында таныҡлыҡ тапшырыуҙың артыуы билдәләнгән. Бүҙдәк һәм Нуриман районтарында ошо осорҙа тыуым күрһәткестәре былтырғы кимәлдә ҡалған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Карта менән түләгәндә юл хаҡы арзанырaҡҡа төшә. Мәҫәлән, хәҙер "Башавтотранс" автобустарында ҡулаҡса менән иҫәпләшкәндә - 25, ә транспорт картаһы йәки банк картаһы менән 20 һум.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# БАЛАЛАРҒА...

**Башҡортостанда бөтә ғаиләләрҙең (күпме килем алыуы мөһим түгел) балалар баҡсалары өсөн түләүгә компенсация алыуға хоҡуғын нығытырға тәҡдим ителә. Республика Дәүләт Йыйылышы депутаттары "Мәғариф тураһында"ғы законға даими нигеҙҙә мохтажлыҡ критерийы тураһында норманы бөтөргән үҙгәрештәр ҡабул итергә ниәтләй.**

Бынан алда республика парламенты ике тапҡыр мохтажлыҡ критерийы хаҡында норманы бөтөргән закондар ҡабул итте. Хәҙер республикала бөтә ғаиләләр ҙә, килеменә ҡарамайынса, тулы күләмдә компенсация ала. Ләкин был бер йылға билдәләнгән ваҡытлыса норма ине. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, әлеге законды ҡабул итеү балаларҙы мәктәпкәсә белем биреүгә йәлеп итергә, демографик хәлде яҡшыртырға мөмкинлек бирергә тейеш. Компенсацияларҙың күләме баҡсаға йөрөгән балалар һанына бәйле. Беренсе балаға компенсация - уртаса түләүҙән 20 проценттан кәм булмаған күләмдә, икенсеһенә - 50 проценттан кәм түгел, өсөнсөһөнә һәм артабанғыларына - 70 проценттан кәм түгел. Ҡабул ителгән осраҡта, яңы закон 2020 йылдың ғинуарынан үҙ көсөнә инә.

# ТАҒЫ БЕР ЯРҘАМ

**Рәсәйҙең Финанс министрлығы ишле ғаиләләргә ипотеканы ҡаплау өсөн бюджеттан 450 мең һум биреү тәртибен ябайлаштырырға тәҡдим итте.**

Хөкүмәт ҡарары проектына ярашлы, заемсыларға программала ҡатнашыу хоҡуғын раҫлаған документтар менән ипотека алған банкка мөрәжәғәт итергә кәрәк, тип хәбәр итә "Российская газета" баҫмаһы. Банк, үҙ сиратында, был документтарҙы "ДОМ.РФ" йәмғиәтенә ебәрә, унда уларға тикшереү үткәрелә, шунан "ДОМ.РФ" аҡсаны кредитты ҡаплауға йүнәлтеү-йүнәлтмәү тураһында ҡарар ҡабул итә. Тәүге осраҡта ул банкка ипотеканы ҡаплау иҫәбенә 450 мең һум күсерә (әгәр кредиттың ҡалған суммаһы аҙыраҡ булһа, шунса күләмдә). "ДОМ.РФ" йәмғиәтенә ошо маҡсатҡа ҡаҙнанан махсус субсидиялар бүленә.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2019 йылдың 1 ғинуарынан 2022 йылдың 31 декабренә тиклем ғаиләлә өсөнсө йәки артабанғы балалар тыуған осраҡта, ипотеканы ҡаплау өсөн бюджеттан 450 мең һум алырға мөмкин. Был яңы ярҙам механизмын хөкүмәт Президенттың ҡушыуы буйынса әҙерләй. Уны тормошҡа ашырыуға 2019 йылда хөкүмәт үҙенең резерв фондынан 15 миллиард һум бүлергә ҡарар итте.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ҺАЙЛАУҘАРҒА!



**2019 йылдың төп сәйәси ваҡиғаһы - 8 сентябргә билдәләнгән Башҡортостан башлығын һайлау. Был көндә шулай уҡ урындағы үҙидараның вәкиллекле органдарына һәм ике округ буйынса Дәүләт Йыйылышына өҫтәмә һайлау була. Бөтәһе 7354 депутат мандаты алыштырылырға тейеш.**

Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Марина Долматова билдәләүенсә, Башҡортостан Башлығы вазифаһына үҙ кандидаттарын күрһәтергә хәл иткән сәйәси партиялар быны 20 июнгә тиклем эшләргә тейеш. Һайлау тураһындағы кодексҡа ярашлы, республика етәксеһе вазифаһына партияларҙан тәҡдим ителгән кандидаттар ғына дәғүә итергә мөмкин. Партияларҙың төбәк конференциялары уҙғас, кандидаттар 1 июлдән 11-енә тиклем һайлау комиссияһына документтарын тапшырырға тейеш. "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк бүлексәһе конференцияһында 8 сентябрҙәге һайлауҙа Радий Хәбировты партиянан Башҡортостан башлығы вазифаһына кандидат итеп күрһәтеү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Алдан тауыш биреү процедураһында ҡатнашҡан барлыҡ дүрт кандидат та конференцияла ҡатнашыусыларҙы үҙҙәренең программалары менән таныштырҙы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Берҙәм Рәсәй" праймеризында Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров, Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры вазифаһын башҡарыусы Борис Беляев, "Рәсәй терәге"нең төбәк бүлексәһе етәксеһе Ләйсән Николаева һәм Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡатнашты. "Эшмәкәрлегемдең һәм командамдың төп маҡсаты - республикабыҙҙың күп милләтле халҡының мәнфәғәттәре. Халыҡтың теләктәрен иҫәпкә алырбыҙ, ғәҙел булырбыҙ. Беҙ билдәле бер һайлау процесын башлайбыҙ. Һәр берегеҙ минең һәм командамдың эшен күрҙе. Артабан да эшмәкәрлегемдә бер нәмә лә үҙгәрмәҫ", - тине Радий Хәбиров. Кандидаттарҙың сығышынан һуң конференцияла ҡатнашыусылар йәшерен тауыш бирҙе. 323 делегаттың 264-е Радий Хәбиров яҡлы булыуын белдерҙе.

# ҺОРАУҘАРҘЫ - ПУТИНҒА



**20 июндә "Владимир Путин менән тура бәйләнеш" махсус программаһы була. Дәүләт башлығы илдең ижтимағи-сәйәси һәм социаль-иҡтисади тормошона, шулай уҡ халыҡ-ара хәлгә ҡағылышлы һорауҙарға яуап бирә.**

Һорауҙарҙы телефондан шылтыратып, СМС йәки ММС-хәбәр ебәреп, шулай уҡ программаның сайты йәки махсус мобиль ҡушымта аша бирергә мөмкин. "Тура бәйләнеш"кә мөрәжәғәттәр "Бәйләнештә" һәм "Класташтар" социаль селтәрҙәрендә лә ҡабул ителә. Бынан тыш, "Мәскәү - Путинға" һәм "OK Live" ҡушымталарынан файҙаланыусыларҙың эфир ваҡытында студия менән тура видеоэлемтәгә сығыу мөмкинлеге бар. Берҙәм хәбәрҙәрҙе эшкәртеү үҙәгенә 8-800-200-40-40 номеры буйынса Рәсәйҙең теләһә ниндәй мөйөшөнән шылтыратырға була. Ҡала һәм мобиль телефондарҙан шылтыратыу бушлай. Сит илдән хәбәрҙәрҙе эшкәртеү үҙәгенә +7-499-550-40-40, +7-495-539-40-40 телефондары буйынса шылтыратырға кәрәк. 0-40-40 номерына SMS һәм MMS-хәбәрҙәр рәүешендәге һорауҙар Рәсәйҙең элемтә операторҙары телефонынан ғына ҡабул ителә. Хәбәр ебәреү бушлай. Һорауҙы рус телендә бирергә кәрәк, күләме 70 билдәнән артмаҫҡа тейеш. 9 июндән һорауҙы "Мәскәү - Путинға" рәсми мобиль ҡушымта аша ла ебәрергә мөмкин. 20 июндә программаның сайтында һәм Рәсәй йәмәғәт телевидениеһы (ОТР) эфирында сурдотәржемә менән трансляция була.

# ЮЛ ЙӨРӨГӘНДӘ...




**Башҡортостанда Берҙәм транспорт картаһы өсөн исем һайланылар. Ул ағымдағы йылдың 1 июленән ғәмәлгә инә. Юл өсөн автоматлаштырылған түләү системаһы "Алға" тип атала.**

"Берҙәм транспорт картаһы ҡала һәм муниципаль-ара бәйләнеш транспортына этаплап индерелә башлай, - тип билдәләне Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов. - Карта күп өҫтөнлөккә эйә, иң мөһиме - уңайлы һәм финанс яҡтан отошло". Йәмәғәт транспортында Берҙәм транспорт картаһы өсөн махсус терминалдар ҡуйыла. Әле республиканың 1909 транспорты ошо аппараттар менән йыһазландырылған. Карта менән түләгәндә юл хаҡы арзанырaҡҡа төшә. Мәҫәлән, хәҙер "Башавтотранс" автобустарында ҡулаҡса менән иҫәпләшкәндә - 25, ә транспорт картаһы йәки банк картаһы менән 20 һум. Карта буйынса юл хаҡы тулыландырыу суммаһына ҡарап үҙгәрер тип күҙаллана. Күберәк аҡса һалһаң, юл йөрөү хаҡы ла осһоҙораҡ була. Берҙәм транспорт картаһын "Рәсәй почтаһы" бүлексәләрендә, "Өфө-матбуғат" киосктарында, ҡайһы бер магазиндарҙа, "Һаҡлыҡ банкы" һәм "Уралсиб" бүлексәләрендә, Берҙәм транспорт картаһын хеҙмәтләндереү пункттарында һатып алырға мөмкин. Карта 50 һум тора. Тотош республикала тулыландырыу пункттары селтәре асыла, шулай уҡ Һаҡлыҡ банкы-онлайн йәки Уралсибтың интернет банкы аша аҡса һалырға була.

# ИМТИХАНДАР БАРА



**Башҡортостанда 18 уҡыусы профилле математиканы 100 балға яҙған, тип хәбәр иттеләр "Башинформ"ға республика Мәғариф министрлығынан. Былтыр ошо фәндән йөҙ балл алыусылар өсәү ине.**

Профилле математиканы бөтәһе 11 083 уҡыусы тапшырған. Өфөнән - 11, Стәрлетамаҡтан - 2, Октябрьскийҙан - 3, Нефтекаманан 2 ун беренсе класс уҡыусыһы имтиханда юғары балл алған. Дөйөм алғанда, быйыл Рәсәйҙә профилле математика буйынса уртаса балл уҙған йылға ҡарағанда күпкә юғарыраҡ, тип белдерә Рособрнадзор. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2019 йылда математика буйынса имтихан өлөшөндә яңы ҡағиҙәләр ғәмәлдә. Ун беренсе кластар берҙәм дәүләт имтиханының бер генә кимәлен һайлаған - базалы йәки профилле. Уҙған йылдарҙа сығарылыш уҡыусыларының базалы һәм профилле кимәлдәрҙе тапшырыу мөмкинлеге бар ине. Бынан алда агентлыҡ базалы математика, география һәм әҙәбиәт буйынса берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләрен хәбәр итте. Өс мендән ашыу кеше базалы математиканы "яҡшы" билдәһенә тапшырған. Әҙәбиәттән һынау тотоусылар араһында - ике, ә географиянан өс уҡыусы йөҙ балл йыйған. 27 майҙа илдә берҙәм дәүләт имтихандарының төп тулҡыны башланды. Имтихандар 1 июлгә тиклем бара. Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханының төп осоронда 19 787 сығарылыш уҡыусыһы ҡатнаша.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Июнь уртаһында Өфөлә хәүефһеҙлек мәсьәләләре буйынса халыҡ-ара форум ойошторола. Был хаҡта Рәсәйҙең Хәүефһеҙлек советы секретары Николай Патрушев хәбәр итте. Сарала терроризмға ҡаршы көрәш, мәғлүмәти хәүефһеҙлек өлкәһендә үҙ-ара килешеп эш итеү, ғәҙәттән тыш гуманитар ярҙам күрһәтеү өлкәһендә хеҙмәттәшлек темалары тикшереләсәк.. Бынан тыш, форумдың көн тәртибенә "ҡатнаш янауҙарҙың" күбәйеүе шарттарында дәүләттәрҙең тотороҡло социаль-иҡтисади үҫеше мәсьәләләрен дә индерәбеҙ" - тине Патрушев.

✓ Башҡортостандың баш ҡалаһында "Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының юл инспекцияһы" эшләй. Өфөлә эксперттар "Насар юлдар картаһы"нда билдәләнгән гарантиялы юлдарҙың һәм участкаларҙың сифатын, авария күп теркәлгән урындарҙы, үткәүелдәрҙе яҡтыртыуҙы, юл билдәләрен тикшерә. Башҡарылған эш йомғаҡтары буйынса Халыҡ фронты эксперттары Рәсәй Хөкүмәтенә тәү сиратта төбәк һәм урындағы юлдарҙың сифатын арттырыуға йүнәлтелгән "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проектын һөҙөмтәле бойомға ашырыуға өлгәшеү тураһында тәҡдимдәр әҙерләй.

✓ Рәсәй авиакомпанияһы "Өфө" аэропорты менән Башҡортостандың баш ҡалаһынан Санкт-Петербургка көндәлек рейстар башҡарыу тураһында һөйләшеп килеште. Авиакомпания төньяҡ баш ҡалаға осоштарҙы 17 сентябрҙән башларға ниәтләй. 12 июндән "Еңеү" авиакомпанияһы Өфөнән Мәскәүгә даими рейстар башҡара башлай. Рейстар көн һайын 189 пассажир һыйҙырышлы Boeing 737-800 һауа судноһында башҡарыла. Самолет Өфөнән урындағы ваҡыт буйынса иртәнге сәғәт 8-се 10 минутта һауаға күтәрелә.

✓ Өфөлә "Башҡортостандың студент һылыуҡайы" конкурсы еңеүсеһе билдәләнде: еңеүсе исеменә Башҡорт дәүләт университетының икенсе курс студенты Алһыу Ҡурамшина лайыҡ булды. Еңеүсе гәүһәр менән биҙәлгән алтын биҙәүес, "Эпл" компанияһынан 300 мең һумлыҡ сертификат, Ҡаҙанға сәйәхәт, Pandora сәғәте, таж менән бүләкләнде һәм Башҡортостанды халыҡ-ара, Бөтә Рәсәй матурлыҡ конкурстарында күрһәтеү мөмкинлеген алды. Конкурста бөтәһе 19 кеше ҡатнашты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Инглиз теле буйынса белемен спорт күнекмәләре яһаған, гитарала уйнарға һәм бейергә өйрәнгән, баш ҡала буйлап экскурсия мәлендә һәм дуҫтар менән һөйләшкән арала нығыта уҡыусылар.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# БАЛАЛАР ЯЛ ИТӘ

Йәй - уҡыусыларҙың каникулы мәле. Баш ҡалала балаларҙың, үҫмерҙәрҙең һәм йәштәрҙең ялын, мәшғүллеген һәм сәләмәтлеген нығытыу сараларын ойоштороу тураһында хакимиәттең Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова сығыш яһаны. Уның билдәләүенсә, быйыл йәйге һауыҡтырыу миҙгеленә республика бюджетынан - 203,1, ҡала бюджетынан 107,5 миллион һум аҡса бүленгән һәм төрлө типтағы 274 ял, балаларҙы һауыҡтырыу учреждениеларында, 138 ихата майҙансыҡтарында 116,5 мең бала, үҫмер һәм йәш кеше, шул иҫәптән 16 меңе - ауыр хәл-торошта ҡалыусылар, ял итәсәк. Балаларҙы хеҙмәткә өйрәтеү маҡсатында йыл һайын белем биреү усаҡтарында хеҙмәт бригадалары һәм берләшмәләре ойоштороla. Быйыл 50 мeңдән ашыу уҡыусы мәктәп яны участкаларын һәм учреждение ҡарамағындағы территорияны йәшелләндереү эшенә йәлеп ителгән. Балиғ булмағандарҙың мәшғүллеген ойоштороу сиктәрендә Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәге аша 5750 үҫмерҙе ваҡытлыса эшкә урынлаштырыу һәм уларға эш хаҡы түләү планлаштырыла. Бынан тыш, балаларҙы физик культураға һәм спортҡа йәлеп итеүгә, спортсыларҙың күнекмәләрен өҙлөкһөҙ дауам итеүгә йәһәтенән дә шарттар тыуҙырылған.



**25 марттан 5 июнгә тиклем баш ҡалала "Иң яҡшы күп фатирлы йорт советы" муниципаль конкурсы үтте. Уға 67 ғариза бирелеп, ҡала этабына 8 кандидат һайлап алынды. Күп фатирлы йорттар советтарының үҙҙәренең милкендә булған майҙандарҙы төҙөк тотоу буйынса бик күп тәҡдимдәре булғанлығын асыҡлай был конкурс. Тейешле органдарға бары тик уларҙы хупларға һәм ярҙам итергә генә кәрәк. Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә тап ошо конкурста еңеүселәрҙе тәбрикләүҙән башланды. Еңеүселәргә дипломдар һәм аҡсалата приздар тапшырылды. Был сумма йорт ихтыяжына тотоноласаҡ. Ә инде күсмә кубокка быйыл Дим районы эйә булды.**

Етем, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар - айырым иғтибар үҙәгендә тора. Майҙан авгусҡа тиклем улар шифаханаларға һәм һауыҡтырыу лагерҙарына ебәреләсәк. Әлбиттә, уҡыу йылы тамамланыр алдынан мәктәптәрҙә хәүефһеҙлек буйынса синыф сәғәттәре үткәрелгән, балаларҙың ял итеү урындарында тәртип һаҡлау буйынса саралар уҙғарылған, тейешле органдар барлыҡ спорт ҡорамалдарын һәм инвентарҙарын тикшереп сыҡҡан, шулай уҡ санитар тикшереү, янғынға ҡаршы хәүефһеҙлек саралары булдырылған, һыу инеү, юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре буйынса инструктаж үткәрелгән. Елена Хаффазова белдереүенсә, барлыҡ хеҙмәттәр менән берлектәге эш балаларҙың йәйге ялын ғәҙәттән тыш хәлдәрһеҙ үткәрергә булышлыҡ итәсәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Өфө ҡалаһының Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында үткән аҙнала дүрт төрлө балалар лагеры үҙ эшен башланы. Уларҙа гимназияның һәм баш ҡаланың башҡа белем усаҡтары уҡыусылары йәйге ялдарын файҙалы, күңелле итеп үткәрергә йыйылды.**



Белем усағында ун алтынсы тапҡыр ойошторолған Америка-Башҡорт интерколледжының "ACCESS /ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы буйынса йәйге лагерына быйыл 30 уҡыусы йөрөй. Күптән бөтә Рәсәйгә билдәле һәм 35 урында тормошҡа ашырылған был гуманитар проект, һәр ваҡыттағыса, файҙалы, ҡыҙыҡлы итеп ойошторолған. Инглиз теле буйынса белемен спорт күнекмәләре яһаған, гитарала уйнарға һәм бейергә өйрәнгән, баш ҡала буйлап экскурсия мәлендә һәм дуҫтар менән һөйләшкән арала нығыта уҡыусылар. "Инглизсә иркен һөйләшергә өйрәнеү өсөн бик ҡулайлы педагогик модель булып тора беҙҙең был халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы. Шуға, беҙҙең лагерҙа ял итергә теләүселәр йыл да күп, әммә финанс мөмкинлектәр бер аҙ сикле, - ти Америка-Башҡорт интерколледжы директоры Вячеслав Швайко. - Бейеү, драма, IT-технологиялар, спорт, видео клубтарының дәрестәре көн һайын мотлаҡ үткәрелә, тағы ла уҡыусылар гитарала уйнарға, сәнғәт һөнәре һәм ҡул эштәре дәрестәренә йөрөй. Икенсе эш йүнәлеше - тематик көндәр ойоштороу һәм лидерлыҡ мәктәбе. Тыйнаҡ һәм оялсан балалар бар, уларҙа үҙ көсөнә ышаныс, һәләттәрен үҫтерергә ярҙам итәбеҙ, шунһыҙ кеше юғары уңышҡа өлгәшә алмай хәҙер. Был йәһәттән тематик көндәр бик ярҙам итә, 14 көн дауамында уҡыусылар төрлөсә үҙен күрһәтә. Өсөнсө йүнәлеш - Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына арнап, баш ҡала буйлап мәҙәни һәм тарихи экскурсиялар ойошторабыҙ". Әйтергә кәрәк, лагерға йыл да инглиз телле уҡытыусылар эшкә йәлеп ителә һәм Джереми Севидж уҡыусыларға күптән таныш. Быйыл уның улы Семюэль да башҡорт телле тиҫтерҙәре менән бергә лагерға йөрөй. "Коллегам, инглиз теле уҡытыусыһы һәм был лагерҙа драма түңәрәген етәкләүсе Гүзәл Моратова менән беҙгә алмашҡа үҫеп килгән йәштәрҙе күреп һөйөнәбеҙ. Быйыл лагерҙа эшләгән вожатыйҙар һәм уларҙың унлап ярҙамсыһы беҙҙең элекке уҡыусыларыбыҙ һәм ваҡытында ошо халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһын үткән кешеләр", - ти лагерь етәксеһе Диана Закирова.

Шулай уҡ 20-се Башҡорт гимназияһында тәүге тапҡыр "Йәйләү" лагеры асылды, унда Совет районының төрлө белем усаҡтарынан 30 бала йөрөй. Уның сиктәрендә уҡыусыларға башҡорт мәҙәниәте, тарихы, музыка уйын ҡоралдары буйынса файҙалы дәрестәр, экскурсиялар, билдәле шәхестәр менән осрашыуҙар планлаштырылған. Ә бына хеҙмәт лагерына 10-сы синыф уҡыусылары йөрөй, үҫмерҙәр йәйге ял осоронда үҙҙәре яратҡан белем усағы территорияһын тәртиптә тотоу өсөн теләп эшкә сыға. "Үҙебеҙ ултыртҡан ағас, сәскәләрҙе ҡараған уҡыусыларҙың хеҙмәт емешен көҙгөһөн мәктәптәр араһында үтәсәк иң матур баҡса конкурсында һынаясаҡбыҙ. Әммә лагерҙың төп маҡсаты: балаларҙы тырышлыҡҡа, хеҙмәткә өйрәтеү, тәбиғәткә ҡарата һөйөү тәрбиәләү", - ти гимназияның тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Марат Ғилманов. Был белем усағында тағы ла "Ҡурай" көндөҙгө лагеры 14 йәшкә тиклемге 120 бала өсөн ойошторолған. "Был лагерға башланғыс синыф уҡыусылары күп йөрөй, уларға 21 көнгә ял итеү программаһы төҙөлгән. Балалар бында саҡта ике тапҡыр бушлай ашай, төрлө урындарға экскурсияға, бассейнға, театрға, киноға йөрөй, күңелле уйындар уйнай, тиҫтерҙәре менән аралаша. Ата-әсәләргә борсолорға урын ҡалдырмайбыҙ", - тип һөйләне лагерь эше тураһында етәксеһе Зөһрә Ҡазыханова.

**Камилә ҒӘЛИЕВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Кейәү ҡамсыһы

❖ Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, бөйән эсәге сей яраһы, гипертония, бөйөр, бауыр, ашҡаҙан аҫты биҙе һәм бәүел ҡыуығы сирҙәре мәлендә бик матур атамалы үлән - кейәү ҡамсыһы (зопник) ҡулланығыҙ. 2 ҡалаҡ кейәү ҡамсыһы үләне һәм сәскәһенә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, йылы әйбергә урап 5-6 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 1,5-1 сәғәт алда 100-әр мл эсергә. Дауаланыу курсы - 24 көн, 10 көн ял иткәндән һуң, тағы ҡабатлайбыҙ. Был һауыҡҡансы дауам итә.

❖ Тиҙ үҫешкән лейкоз, лейкемиянан, яман шеш ауырыуҙарынан да дауалай. 4-5 ҡалаҡ кейәү ҡамсыһы үләне һәм сәскәһенә 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 5-6 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм ашарҙан 1 сәғәт алда 50-әр мл эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә. Дауаланған мәлдә спиртлы эсемлек эсергә, тәмәке тартырға ярамай.

### Катаракта

❖ 1 балғалаҡ балға 1 стакан һалҡын һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә, ҡайнау хәленә еткерергә, һыуытырға һәм көнөнә 2 тапҡыр 10 минутҡа күҙ ҡабаҡтарына сылатҡыс һалырға.

❖ Алманың өҫкө өлөшөн ҡырҡып алып, үҙәген алырға, эсенә бал ҡойорға, ҡырҡып алынған өлөшө менән ҡире ябырға. 2 көндән һуң килеп бүленеп сыҡҡан һутты быяла һауытҡа ҡойоп алырға. Иртәле-кисле күҙҙәргә 1-2 тамсы тамыҙырға. Дауаланыу курсы - 1 аҙна ярым.

### Стоматит

❖ Стоматит - ауыҙ тиресәһе шешеүен дауалау өсөн ҡырҡбыуын ҡулланыла. 1 өлөш үләнгә 10 өлөш ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм ауыҙ ҡыуышлығын сайҡарға. Һәр ваҡыт яңы ғына әҙерләнгән төнәтмә ҡулланырға. Көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

❖ 2 балғалаҡ календулаға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә лә, ауыҙҙы сайҡарға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**XX быуат башында был сәнғәт тағы ла сағыуыраҡ төҫтәр менән балҡый. Яңы йүнәлеш барлыҡҡа килә - буй балаҫтарҙы (ҡайһы саҡта биҙәклеләрен дә) буялған кизе-мамыҡ ептән йәки нәҙек кенә итеп ҡырҡылған фабрика туҡымаһынан һуға башлайҙар. Өлпәк булмаған балаҫтар кеүек үк, уларҙың да бер нисәһен бергә тоташтырып тегеп, ҙур балаҫ яһайҙар.**

Буйлы орнаментты нисек тә байытырға тырышыуҙан "теш", "баҫҡыс", төҫлө пунктир һәм башҡа ябай ғына биҙәктәр тыуҙырыу, күрәһең, электән килә. Уларҙы ҡырғыҙ, ҡаҙаҡтарҙың туҡыманан яһалған һәм "ала таар", "алаша" тип аталған буй балаҫтарында, тирмә биҙәүе - таҫмаларҙа, "терме", "терме алаша" тип аталған боронғо биҙәктәрендә күрергә була. Үкенес, Урта Азия халыҡтарының буй балаҫтары тураһында әҙәбиәт юҡ тиерлек. Шуныһы билдәле, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡтарҙа, ярым күсмә тормош алып барған үзбәктәрҙә йөн ептән һуғылған буй балаҫтарҙы стенаға, иҙәнгә йәйә торған кейеҙҙәргә теккәндәр. "Ҡаҙаҡтарҙың халыҡ биҙәү-ҡулланма сәнғәте" тигән альбомда (1970) көрән, һары, ҡыҙыл, йәшел йөндән һуғылған балаҫ бар, ул көньяҡ-көнсығыш башҡорт балаҫына оҡшап тора, әммә ҡаҙаҡ балаҫы буйына ҡарай һуғылған.



*Буй балаҫ оҫтаһы С. Килдебаева. Хәйбулла районы Әбүбәкер ауылы. Автор фотоһы. 1981*

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары һәм Төньяҡ Кавказ һарыҡсылары балаҫ һуғыу сәнғәтендә лә оҡшашлыҡ бар. Дағстандың көньяғында буй балаҫты ер иҙәнгә түшәгәндәр. Балаҫтарҙағы биҙәктәрҙең оҡшаш булыуы бер нисә балаҫты ҡушып йәйгәндә дөйөм бер художестволы композиция тыуҙырған, бер балаҫ икенсеһенең дауамы булараҡ ҡаралған. Бигерәк тә торлаҡтың ҡунаҡ яғына түшәлә торған балаҫ ентекле һайланған, сөнки ҡунаҡтарҙы иҙәндә һыйлағандар. Ҡумыҡтар, башҡорттар кеүек үк, башта бер нисә буй балаҫ һуғып, аҙаҡтан уларҙы тоташтырып тегеп сыҡҡан. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарынан айырмалы рәүештә, ҡумыҡтарҙа буйҙар киңерәк (40-50 см) һәм тегелеше ҡаҙаҡтарҙыҡы кеүек - арҡырыһына, ҡайһы бер киң буйҙарға геометрик биҙәктәр һалына.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Сығарылыш уҡыусылары ғына түгел, юғары уҡыу йорттары ла яңы уҡыу йылына ҡосорғанешле әҙерләнә. Ошо әҙерлек сиктәрендә республика вуздарында ниндәй эштәр башҡарылыуы, үткәргес балдар кимәле, бюджет урындары һаны тураһында Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Ленара Иванова һәм баш ҡалала урынлашҡан юғары уҡыу йорттары ректорҙары "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында журналистар менән осрашыуҙа һөйләне.**




# ҠАЙҘА УҠЫРҒА БАРЫРҒА?

Башҡортостандың юғары уҡыу йорттары Рәсәйҙең 662 вузы араһында төрлө күрһәткестәр буйынса ла яҡшы иҫәптә тора, сит илдәр кимәлендә лә юғары баһалана. Мәҫәлән, Башҡортостан бюджет урындары тәҡдим итеү буйынса Рәсәйҙә 9-сы урында тора. "Быйыл өҫтәмә рәүештә Башҡорт дәүләт университетында - 574, Өфө дәүләт нефть техник университетында - 294, Өфө дәүләт авиация техник университетында 185 бюджет урын асыласаҡ, киләһе 2020-2021-се уҡыу йылына тағы ла 1073 бюджет урыны асыу планлаштырыла. Был Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса, йәштәр күпләп ситкә китмәһен өсөн эшләнә", - тине Ленара Иванова. Ысынлап та, быға тиклем Башҡортостандың иң юғары баһаларға лайыҡ булған йәштәре ситкә уҡырға китә, тип иҫәпләнә ине. Әммә һуңғы тикшеренеүҙәргә ярашлы, быйыл 19 787 сығарылыш уҡыусыһы БДИ тапшыра, ә юғары уҡыу йорттарында 10 191 кешегә түләүһеҙ белем биреү урыны ҡаралған, 8 мең тирәһе абитуриент түләүле бүлеккә килә, тип көтөлә.

Артабан Өфөләге юғары уҡыу йорттары ректорҙары йәштәрҙе ылыҡтырыр мәғлүмәттәр ишеттерҙе. Өфө дәүләт нефть техник университеты ректоры Рәмил Бәхтизин әйтеүенсә, Бөтә Рәсәй олимпиадаһында еңеү яулаған һәм имтихандар тапшырмайынса ҡабул ителгән студенттарға бер йыл дауамында 30-ар мең һум стипендия, БДИ һөҙөмтәләре 250 балдан күберәк булған студенттарға 10 мең һум стипендия түләнәсәк.

**Башҡорт дәүләт медицина университетында** 677 абитуриент түләүһеҙ уҡыясаҡ, шулар араһында 411 кеше маҡсатлы уҡытыуға ярашлы һәм 600 тирәһе студент түләп уҡыуға алына, сит




илдән килгән 300-400 студент ҡабул ителәсәк. Вуз ректоры Валентин Павлов Берҙәм дәүләт имтихандары күрһәткестәренә талаптар йылдағыса юғары, ниндәй йүнәлеште һайлауға ҡарап, предмет өсөн 50-55 балдан кәм булмаҫҡа тейеш, тип билдәләнә. Аҡса түләп уҡырға мәжбүр булғандарҙың дөйөм балдары дауалау бүлегендә - 190, педиатрияла - 180, стоматологияла 160 булырға тейеш. Ординатураға ла маҡсатлы уҡытыу буйынса алыу ҡаралған.

**Башҡорт дәүләт аграр университетында** 1771 бюджет урыны буласаҡ, бөтә студенттарға ла ятаҡтан



урын бирелә, хатта иҡтисад факультетында белем алыусылар бушлай йәшәй. Халыҡ-ара аккредитация үткән аграр өлкәһе, ветеринария һөнәрҙәренә конкурс йылдағыса юғары булыр, тип көтөлә.

**Өфө дәүләт авиация техник университетында** 1785 абитуриентты түләүһеҙ уҡырға көтәләр, 1500 тирәһе кешене түләүле бүлеккә алалар. "Ишембай һәм Күмертау ҡалаларындағы филиалдарҙа ла түләүһеҙ уҡырға алыу мөмкинлектәре артты. Беҙҙең вуз хәрби әҙерлек алып барған берҙән-бер юғары уҡыу йор-



то, быйыл уҡытыу-хәрби үҙәгенә 140 кешене ҡабул итәбеҙ. Бынан тыш, бик күп йүнәлештәр буйынса бакалавр дипломын алырға, 10 йүнәлештән специалитет тамамларға була. Студенттарға 17 төр стипендия булдырылған һәм Бөтә Рәсәй олимпиадалары еңеүсеһе һәм призерҙарына уҡырға ингән йылда ай һайын 25 мең һум өҫтәп түләнә, БДИ һөҙөмтәһе 200 балдан күп булғандарға ла юғары стипендия тәғәйенләнә", - ти вуз ректоры Николай Криони.

**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты** яңы уҡыу



йылына 1689 бюджет урыны әҙерләгән, өҫтәмә рәүештә федераль бюджеттан да бюджет урыны биреләсәк. Вуз төрлө йүнәлештәр буйынса юғары белемле педагогтар әҙерләү менән генә сикләнмәй, быйыл WorldSkills һөнәри оҫталыҡ буйынса донъя чемпионатының 10 компетенцияһына белгестәр тәрбиәләүҙе юлға һалырға уйлай һәм кәрәкле инфраструктура төҙөй. Тағы ла "Уралсиб" банкы менән берлектә банк хеҙмәткәрҙәре, 1С программаһы белгесе әҙерләү эшен башлағандар.

**Башҡорт дәүләт университеты** 2400 урынға абиту-



риенттар көтә, шул иҫәптән 800 бюджет урыны вуздың филиалдарына бирелгән. Юғары уҡыу йортонда йыл да төрлө һөнәрҙәр буйынса уҡытыу ойошторолоп тора. Мәҫәлән, былтыр "Роснефть" компанияһы менән хеҙмәттәшлектә геологик разведка технологияһы теорияһы йүнәлешендә "Петрофизикала цифрлы технологиялар" тигән кафедра асылған. Бында уҡырға килгән студенттарға "Роснефть" компанияһында эшләргә, уҡыу барышында төрлө проекттарҙы тормошҡа ашырыу һәм артабан эшкә ҡалыу мөмкинлеге бар. БДУ ике яҡлы диплом тапшырыу юҫығында күп эшләй һәм республикала диплом эстәлеген халыҡ-ара өлгөлө итеп сығарған берҙән-бер вуз. Был танытмалар Европа союзы тарафынан танылған һәм йәш белгестәргә сит илдә эшкә урынлашыу мөмкинлеге бирә. Ғөмүмән алғанда, вуз студенттарға сифатлы белем алыу, һәләттәрен үҫтереү, йәшәү уңайлыҡтарын булдырыу, матди яҡтан ярҙам итеү өсөн барыһын да эшләй.

Башҡорт дәүләт университеты түләүһеҙ уҡырға ҡабул итеү буйынса алдынғы булһа, **З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты**, киреһенсә, иң аҙ бюджет урындары тәҡдим ителгән вуз. Унда 20-нән ашыу төр һөнәри әҙерлек бүлектәренә ни бары 72 бюджет урын бүленгән. Вуз ректоры Әминә Әсфәндийәрова әйтеүенсә, ҡайһы бер уҡыу йүнә-



лештәренә 2-3, иң күбе 6 кеше түләүһеҙ уҡырға инә ала. "Был Рәсәйҙәге башҡа мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендәге юғары уҡыу йорттарындағы хәлдәр менән сағыштырғанда яҡшы күрһәткес", - тип билдәләй Әминә Ибраһим ҡыҙы. Был дәрәстәр ҙә, ни тиһәң дә, сәнғәт өлкәһенә тик тыумыштан һәләтле һирәктәр генә килергә тейештәр.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Быйылдан Рәсәйҙә маҡсатлы уҡытыу системаһына үҙгәрештәр индерелгән һәм илдең ҡайһы төбәгендә йәшәүгә ҡарамаҫтан, йәш кеше кәрәкле юғары уҡыу йортона документын тапшыра ала. Яңы белгескә заказ биреүсе яҡ һәм вуз араһында килешеү төҙөлә, заказсы студентҡа ярҙам итеп торорға, ә йәш кеше уҡыуын тамамлағас, өс йыл эшләп, бурысын ҡайтарырға тейеш. Заказсы сифатында власть, урындағы үҙидаралыҡ органдары, юридик кеше, шәхси эшҡыуарҙар ҙа сығыш яһауы мөмкин.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

✓ Юрматылар ҙа ырыу башы Туһал Шағали бей етәкселегендә Кама йылғаһының уң ярына сығып, Ҡара йылға, Шадлыҡ йылғалары үҙәндәрендә көн итә.



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЮРМАТЫЛАР БЕҘ!




Тарихсы һәм журналист Салауат Хәмиҙуллин юрматыларҙың тарихын Урал һәм Волга буйында йәшәгән иран телле ҡәбиләләрҙең финуғырлашыу һәм төркиләшеү процестары менән бәйләп өйрәнеүҙе хуп күрә. Ул X быуатта венгрҙар составына ингән Гермат атамалы ырыуҙың савромат-сарматтарға барып тоташыуын фаразлай. Унынса, сармат исеменең сауромат, сирмат, сюрмат формаларында әйтелеү мөмкинлеген инҡар итеп булмай. Шуға күрә юрматы этнонимын сармат атамаһы менән бәйләп аңлатыусы ғалимдар бар. Әгәр шулай икән, юрматы ырыуының килеп сығышында иран телле боронғо сарматтарҙың ҡатнашлығы булып, уларҙың бер өлөшө башҡорт этносы составына инеүен, ҡалғандары мадъяр-мажарҙар (Мегери) менән Паннонияға юлланыуын күҙалларға нигеҙ бар, тип фекер йөрөтә ул.

Тарих белгестәре раҫлауынса, юрматыларҙың ата-бабалары XIII-XIV быуаттарҙа әле йәшәгән ерҙәренән көнбайыштараҡ, урманлы-далалы Бөгөлмә ҡалҡыулығының һыуайырғысы - Зәй һәм Шешмә йылғаларының үрге ағымы арауығында көн күрә. XIV быуат аҙағында Аҡһаҡ Тимер һәм Туҡтамыш хан араһында барған үлемесле яу көньяҡ башҡорт ырыуҙары еренә килеп етә. 1391 йылдың июнендә Ҡондорса йылғаһы буйында, юрматылар йәшәгән ерҙәргә йәнәшә генә, ике ғәскәр араһында хәл иткес бәрелеш башлана. Ошо яу урындағы башҡорт түрәләрен, халыҡты оло ҡырғындан ҡурсалау маҡсатында, йәшәгән ерҙәрен ташлап, хәүефһеҙерәк яҡтарға күсеп китергә мәжбүр итә. Юрматылар ҙа ырыу башы Туһал Шағали бей етәкселегендә Кама йылғаһының уң ярына сығып, Ҡара йылға, Шадлыҡ йылғалары үҙәндәрендә көн итә. Уның улы, Дәрүиш ҡушаматлы Ғәли Шәйех, атаһы вафат булып, бөйөк бей дәрәжәһен алғас, үҙ халҡын элекке ерҙәренә - Зәй, Шешмә буйҙарына алып ҡайта.

Артабан, XV-XVI быуаттарҙа юрматылар Нуғай урҙаһы хандары йоғонтоһонда йәшәй. Ғәли Шәйехтең улы, Сәсле Дәрүиш бей үҙенең берҙән-бер ҡыҙын нуғай кешеһенә кейәүгә бирә, уларҙың Бурнаҡ һәм Йәдкәр исемле улдары тыуа. Ырыу башы Бурнаҡ бей кеүек, юрматы башҡорттары менән нуғайҙарҙың ҡатнаш никахтарынан тыуған нәҫелдән нуғай-юрматы тоҡомо хасил була. Юрматыларҙың боронғо төйәге, нуғай түрәләренең ҡусмә тормошо өсөн уңайлы булып, улар хакимлыҡ аҫтында ҡала. Юрматылар көньяҡ-көнсығышҡа табан йүнәлеп, Һаҡмар, Яйыҡ, Ағиҙел йылғалары буйындағы ерҙәргә килеп етә. Ағиҙелдең уң яғына сығып йәшәү нуғай баҫҡынсылары ҡыҫымынан азат булыу мөмкинлеген бирә. Улар был ерҙәрҙә XVI быуат урталарына, нуғай мырҙалары үҙ халҡын Кубань тарафтарына алып киткәнсе йәшәй. Юрматыларҙың көтөүлектәре, һунар итеү ерҙәре төньяҡҡа табан Елем, Инйәр буйҙарына тиклем һуҙыла. Улар хатта йәнлек тиреһе әҙерләү, егеттәргә кәләш күҙләү ниәте менән төньяҡ-көнсығыш башҡорттары ерҙәренә, Йөрүҙән буйҙарына барып етә. Йөрүҙән буйындағы Ахун ауылына юрматылар нигеҙ һалған, тигән риүәйәт тә бар. Нуғайҙар киткәс бушап ҡалған ерҙәренә юрматылар кире ҡайта, улар ошо ерҙәренә, Мәскәү дәүләтенә ҡушылған мәлдә алған грамоталарына ярашлы, аҫабалыҡ хоҡуғын теркәй.

Юрматыларҙың ырыу структураһына түбәндәгеҫә аталған этник берләшмәләр (түбә, аймаҡтар) инә: юрматы, тәлтем, тәтәгәс, ҡармыш (маҡар), нуғай-юрматы, мишәр-юрматы. Аҙнай, илсектимер аралары, ырыу башлыҡтарының ошо исемле нәҫелдәренән хасил булып, тәлтем түбәһенә ҡарай. П.И. Рычков тарафынан юрматыларҙың айырым аймаҡ-түбәләре исемлегенә индерелгән баҡай мишәр-юрматыларға, бишҡаҙаҡтар - тәлтемдәргә ҡарай. Арлар ауылында йәшәүсе башҡорттар V ревизия материалдарында типтәр сословиеһына индерелгән. Башҡорттар удмурттарҙы ар, тип атаған. Күрәһең, ошо ауыл кешеләре араһында ниндәйҙер башҡортлашҡан удмурт сығышлы кеше лә булғандыр.

Р.Ғ. Кузеев юрматы ырыуы структураһына ингән исем-атамаларҙың 100-ҙән ашыу булып, уларҙың 39-ы - патронимик, 21-е - этник, 10-һы - тотемистик, 20-һе - топографик, йә башҡа бер күренеш менән бәйле икәнен күрһәтә. Этник сығышлы атамалар рәтендә ул ҡалмыҡ, муҡшы, сыуаш, үзбәк, бөрйән, бишул, маҡар, табын, таҙ, ҡармыш, юрматы кеүек ырыу түбәләре исемдәрен теркәп ҡуйған. Быны юрматыларҙың башҡа этник төркөмдәр менән тарихи бәйләнешенең сағылышы итеп ҡарау дөрөҫтөр.

Һуңғы йылдарҙа башланған этногенетик тикшеренеүҙәр башҡорт ырыуҙарының килеп сығышына бер ни тиклем асыҡлыҡ индереү мөмкинлеген бирҙе. Уларға ярашлы, юрматы ырыуының ирҙәр генофонды бер нисә төркөмдән барлыҡҡа килгән. Юрматылар генофондының 3/1 өлөшө R1a-M198, 4/1 өлөшө N1c1-M178 гаплогруппаһына ҡарай, шулай уҡ Алғы Азия (J2a-M172, E1b-M35, G2a-P15) һәм Көнбайыш Евразия (I1-M253, I2-P37, R1b-M269) гаплогруппалары ла байтаҡ. Ирҙәр линияһы буйынса төп төркөм Тәтегәс бей һәм башҡа ырыу башлыҡтарының вариҫтарынан торһа, юрматылар генофондының нуғай линияһын (нуғай-юрматы) тәшкил иткән төркөм айырымлығы раҫланды. Шулай уҡ этногенетика материалдарынан алынған мәғлүмәт юрматыларҙың айырым төркөмдәренең хәҙерге венгрҙарҙың ҡайһы берҙәре менән ҡәрҙәшлегенә дәлил булып тора. Был да боронғо юрматы-дьярмат башҡорт-венгр бәйләнеше ысынбарлығына ишара. Ә палеогенетик тикшеренеүҙәр юрматыларҙың ата-бабаларының бер өлөшө иртә тимер быуаты осоронда саҡ һәм савромат ҡәбиләләренә ҡарағанын, ә унан да алдараҡ археологияла андронов мәҙәниәте, тип исемләнгән берләшмәгә инеү мөмкинлеген күрһәтә.

Үҙенең оҙайлы тарихында юрматы ырыуынан булып, бөтөн башҡорт иленә танылыу тапҡан, йәшәйешебеҙҙең төрлө өлкәләрендә дан ҡаҙанған милләттәштәребеҙ ғорурлыҡ тойғоһо уята. Ил батырҙары, уҡымышлы дин әһелдәре, сәсән-шағирҙар, яҙыусылар, күренекле ғалимдар, халыҡ артистары, ауыл хужалығы һәм сәнәғәт алдынғылары, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре ошо ерҙә тыуып үҫеп, Башҡортостан һәм Рәсәй кимәлендәге оло шәхестәргә әйләнгән. Уларҙың иң данлыһы, Башҡортостан дәүләтселегенә, Рәсәй федерализмына нигеҙ һалыусыларҙың береһе, үҙенең гилми ҡаҙаныштары менән киң билдәлелек яулаған шәхесебеҙ - Әхмәтзәки Вәлиди Туған башҡорт исемен, уның тарихын бар донъяға яңғырата алды.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 23-сө һанда).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН*

## БАШҠОРТ

Башҡорттар тарафынан 1739 йылда яңынан башланған хәрәкәттең башында Ҡараһаҡал һәм Гәрәй солтаны исемдәре менән танылған ҡалмыҡ шаһзәдәһе Шуна (ҡаҙаҡ һәм алтай дастандарында осраған Шуна батыр) булған. Ниһайәт, ике йыл хөкөм һөргән көрәштәрҙән һуң еңеүҙе рустар ҡаҙанһа ла, ҡаҙаҡ хандары янына ҡасҡан Шуна халыҡ йөрәгендә тәрән эҙ ҡалдырған. Уның хаҡындағы алтай дастандарының өҙөктәрен Радлов, ә башҡорт дастандарыныҡын Игнатьев матбуғатта баҫтырҙы. Был баш күтәреүҙән һуң тимерселек эштәре башҡорттар өсөн ҡабаттан көсләп тыйыла һәм 1737 йылда башҡорттарҙың йыйындары (ҡоролтайҙары) ҡәтғи рәүештә тыйыла. Тик был боланан һуң, рустар тарафынан һәр ваҡыттағы кеүек Башҡортостанға рустарҙы ерләштерергә тырышыуҙарынан риза булмаған башҡорттар 1755 йылда Батырша абыз етәкселегендә ҡабаттан баш күтәрҙе һәм төрлө ырыуҙар үҙҙәренең ерҙәрендә рус чиновниктарын һәм һалдаттарын үлтерҙе, рус фабрикаларын һәм сиркәүҙәрен яндырҙы. Был юлы быға тиклем Истанбулда рус илсеһе сифатында булған генерал Неплюевтың тырышлығы арҡаһында ҡалмыҡтар менән башҡорттарҙың араһы боҙолоуы сәбәпле, хәрәкәт уңышһыҙ тамамланды һәм ҡулға алынған фиҙакәр етәксеһе Петербургта 1756 йылда төрмәнән ҡасҡан ваҡытта тотоп үлтерелә. Тик был хәрәкәтте баҫтырғандан һуң килгән тыныслыҡ оҙаҡҡа һуҙылмай. 1774 йылда башҡорттар Ҡөҙәй улысының старшинаһы Юлай һәм улы Салауат етәкселегендә ҡабаттан баш күтәреп, рус фабрикаларын емерә, тик был бола бер үк ваҡытта башланған рус казактарының Пугачев болаһы менән бергә баҫтырыла.

Әбей батша Екатерина башҡорттарҙы буйһондороу өсөн өлкәне иҫке традиция буйынса 12 ырыу бейлегенә бүлә (1798 йыл) һәм хатта үҙҙәренең кейемдәре менән, тик утлы ҡоралһыҙ, уҡ-һаҙаҡлы кавалерия полктары ойоштора. Был полктар Наполеонға ҡаршы һуғышта ҡатнашып, Парижға тиклем етә. Уларҙы күргән француз һәм немец авторҙарында көнсығышҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уяна (мәҫәлән, Гетеның улар менән ҡыҙыҡһыныуы тураһында ҡарағыҙ: Шаде, Гетеның көнсығышты аңлайышы, 11-се бит). 1862 йылда был полктар, 1861 йылда ырыу бейлектәре лә (кантондар) бөтөрөлә. Ул заманға ҡәҙәр Тышҡы эштәр министрлығына ҡараған башҡорттар, ниһайәт, 1872 йылда тулыһынса башҡа рус подданныйҙары хәленә төшә. Әммә 1881 йылға тиклем ҡайһы бер бөләкәй башҡорт ғәскәр бүлектәре ҡалдырыла. Ер һәм идара йәһәтенән башҡорттар махсус "Башҡорттар хаҡында положение" исемле ҡанунға буйһона.

1905 йыл революцияһы йылдарында Башҡортостанда мөһим бер хәрәкәт тә күренмәне. 1917 йыл революцияһы башланғас, башҡорттар ҡабаттан хәрәкәткә килде. Шул йылдың 1-10 майында Бөтә Рәсәй мосолмандары ҡоролтайының, мосолман төрки өлкәләренең автономияһын талап иткән ҡарарына таянып, был конгреста ҡатнашҡан башҡорт вәкилдәре үҙҙәренең өлкәләренең идараһын ойоштороу менән шөғөлләнеү өсөн (Әхмәтзәки Вәлидов, Сәғит Мерәсов, Аллабирҙе Йәғәфәров) өс кешелек бер комитет ойоштора. Улар ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙҙар менән килешеп, беренсе башҡорт конгресын йыя. Был ҡоролтай "башҡорттарҙың көнсығыш һәм көнсығыш-көньяҡта автономия өсөн көрәшкән төрки халыҡтары (йәғни ҡаҙаҡ һәм төркөстанлылар)" менән берләшеп, автономия маҡсатын тормошҡа ашырырға" ҡарар итә (Башҡорт аймағы, I. Өфө, 1925, 3).

**(Дауамы бар).**

*✓ Беҙ үҙебеҙ бурысыбыҙҙы тейешенсә үтәмәйбеҙ - булған еребеҙҙе ҡулланмайбыҙ, телебеҙҙе балаларыбыҙға өйрәтмәйбеҙ. Төп ҡаршылыҡ - беҙ үҙебеҙ. Ошо турала уйланайыҡ әле.*



# ОЛО ... оло эштәр

**Республикабыҙ тарихының һынылышлы осорона тура килгән V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ниндәйҙер бер һөйөнөслө өмөт менән көтөлә. Тәҡдим ителгән проекттарҙың, программаларҙың яңыса, ҡыҙыҡлы, үҙенсәлекле булыуы ла, ҡорҙо әҙерләүгә күпләп эшлекле йәштәр йәлеп ителеүе лә, ойошманың етәкселеге алышыныуы ла өмөткә сәбәп бирә шикелле. Был хаҡта беҙ ҡоролтайсыларҙың үҙҙәре менән - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты етәксеһе Данир ҒӘЙНУЛЛИН һәм Башҡарма комитет аппараты белгесе, проекттар менеджеры Илдар КИНЙӘБУЛАТОВ менән һөйләштек.**

**Был ҡоролтайҙа, моғайын, барыһын да ҡыҙыҡһындырған мәсьәлә - ул "Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы" проектылыр, шулай бит? Кемдең идеяһы булды был проект? Уның төп маҡсаты нимәлә? Тормошҡа аша торған хәлме унда яҙылғандар? Бына ошо һорауҙар һәр башҡортто борсойҙор әлеге мәлдә...**

**И. Кинйәбулатов:** Идея билдәле тарихсы, бик фекерле замандашыбыҙ Салауат Хәмиҙуллиндыҡы. Белеүегеҙсә, Стратегия уңышлы һәм төрлө ҡараштарҙан формалашһын өсөн конкурс та иғлан ителгәйне, дүрт йөҙҙән ашыу эш ҡаралды. Халыҡ ысынлап та тәҡдим, идеялары менән әүҙем ҡатнашты.

Стратегия - ул башҡорт халҡының киләсәген аныҡ программала кәүҙәләндерә торған документ буласаҡ. Башлыса йәштәр өсөн эшләнәсәк ул. Шунлыҡтан, йыйын делегаттарының утыҙ проценты йәштәр булырға һәм улар үҙ тәҡдимдәре менән килергә тейеш, тип теркәп ҡуйылғайны положениеға. 90-сы йылдарҙа ҡабул ителгән ҡарарҙар иҫкергән инде, бөгөнгө заманға ярашлы икенсе ҡараш, икенсе төрлө йүнәлештәр талап ителә. Проект бөгөнгә түгел, ә киләсәккә күҙаллап ҡоролған. Ә киләсәк ул - тап бөгөнгө йәштәр. Һәм улар үҙҙәренең киләсәген үҙҙәре ҡорорға тейеш, шуға ла стратегияны күмәкләп төҙөйбөҙ ҙә инде. Беҙҙең дәүләт ҡарамағында үтәлмәй ятҡан матур-матур программалар бар. Ни өсөн үтәлмәй һуң улар? Сөнки улар дөрөҫ ҡоролмаған. Беҙ бына ошондай хаталарҙы яһамаҫ өсөн барыһын да ентекле уйланыҡ һәм етди өмөт менән тәҡдим итәбеҙ проектты.

**Ысынында, беҙ ҡоролтайҙан ҡоролтайға үтәлмәй күсеп килгән бер үк мәсьәләләр тирәһендә һүҙ ҡуйыртабыҙ**



*Бөгөнгө Ҡоролтайға килгән йәштәр ҙә яҡшы мәғәнәләге "революционер" булырға тейеш. Әгәр улар йәмғиәтте үҫтерергә ынтылмаһа, уларҙан ни файҙа? Ҡоро исем тағып йөрөүселәр, фекерһеҙҙәр, ҡурҡаҡтар беҙгә кәрәкмәй. Беҙҙең эш пикет-маҙар ойоштороуҙа ғына түгел, ә аҡыл менән, белем менән алға барыуҙа бөгөн. Хатта Ҡоролтайҙы карьера баҫҡысы итеп ҡараусы йәштәр ҙә булһын. Амбициялы булыу ул үҙе үк бер ныҡлы характер билдәһе.*

**кеүек. Мәҫәлән, ер, туған тел, милли мәғариф тирәһендәге һорауҙарҙан ары китә алмайбыҙ. Былар шулай уҡ та мәңгелек темамы ни?**

**Д. Ғәйнуллин:** Бишенсе ҡоролтай йыйыны ысынлап та яңы форматта һәм эшлекле буласаҡ, тип күҙаллайбыҙ. Быға ҡаса үткән ҡоролтайҙарға генә эшләргә, үҙе генә яуларға ла, халыҡҡа әҙерҙе килтереп тотторорға йә һөҙөмтәләрен иғлан итергә тейеш, тип кенә ҡабул итәбеҙ. Ысынында, Ҡоролтай халыҡтан башҡа айырым көс түгел.

Йәмғиәт - ул шундай нәмә: ул һәр ваҡыт үҫештә булырға, үҙгәрергә ынтылып тора. Һәм анализ эшләйәсәкбеҙ. Сөнки хаталарыбыҙҙы һәм йомшаҡ яҡтарыбыҙҙы аңларға тейешбеҙ. Күҙ буяу, ҡоро һүҙ һөйләү һымаҡ күренештәргә сик ҡуйыласаҡ. Һәм пландар ҙа ысынбарлыҡҡа тап килтереп төҙөләсәк. Был ҡоролтай ололарҙың йыйылып ултырып, әңгәмәләшеү урыны түгел, сөнки беҙ бөгөн әлеге мәлде лә, үткәнде лә тикшерергә түгел, ә киләсәкте ҡайғыртып, аныҡ эштәр башҡарырға йыйылабыҙ. Борон йыйындарҙа, ҡоролтайҙарҙа йөҙәр йыл алдағы быуындар мәнфәғәте ҡайғыртылған, һәм шуның арҡаһында беҙ дәүләтле милләт булып йәшәп киләбеҙ ҙә. Хәҙер беҙ ҙә, ниһайәт, шул аҡыл буйынса эшләргә өйрәнергә тейешбеҙ.

Үткән ҡоролтайҙарҙың да тормошҡа ашҡан эштәре аҙ булманы. Беҙ ни өсөндөр Ҡоролтай үҙе бөгөн беҙҙе лә элекке ҡаҙаныштарыбыҙ ғына ҡәнәғәтләндермәй башланы. Беҙгә яңылыҡтар, яңы үрҙәр яулау кәрәк. Әммә ул яңылыҡтар ҙа ысынбарлыҡҡа тап килергә тейеш. Мәҫәлән, әле күптәр талап иткән аҫабалыҡ хоҡуғын ҡайтарыу ул ысынбарлыҡҡа тап килә торған хәл түгел. Әлбиттә, аҫабалыҡ беҙҙең милләттең иң шәп, уникаль хоҡуғы булған, тик, үкенескә күрә, 1917 йылдағы Лениндың ер тураһындағы декреты бөтә халыҡтарҙы ла тигеҙләгән. Әммә беҙ бөгөн "башҡорттоң ере юҡ", тип әйтә алмайбыҙ. Ауылдарҙа ер иркен, пай ерҙәре бар, фермерҙар ерҙе дәүләт фондынан да алып эшкәртә ала, көтөүлектәргә лә артыҡ сикләү юҡ һәм башҡалар. "Ер юҡ", тип зарланыу урынһыҙ, әлеге мәлдә "булған ерҙе эшкәртеүсе юҡ" тип әйтергә кәрәк. Ҡайҙалыр Себергә китеп йәки башҡа халыҡҡа ялланып эшләп йөрөгән егеттәр үҙ ерҙәрендә аҡса табыу юлын тапһын, йәғни баш баҫып барып ялланыу урынына тормоштарына бер аҙ фекерле, ижади ҡараш ташлаһын ине. Ғөмүмән, "Беҙ ерһеҙ, беҙ телһеҙ" тигән һүҙҙәрҙе бөтөнләй онотайыҡ! Дәүләт һәм закон тарафынан телебеҙ ҙә, еребеҙ ҙә үҙебеҙгә нығытылған. Бығаса меңәр йылдар башҡорт теле бер ниндәй закондарһыҙ һәм мәжбүр итеүһеҙ һаҡланып килгән дә, ни өсөн бөгөн закон һағында булған тел ҡурҡыныс аҫтына эләгә һуң? Тимәк, быға йәмғиәт, ғаилә һәм һәр беребеҙ үҙебеҙ ғәйепле. Беҙ үҙебеҙ бурысыбыҙҙы тейешенсә үтәмәйбеҙ - булған еребеҙҙе ҡулланмайбыҙ, телебеҙҙе балаларыбыҙға өйрәтмәйбеҙ. Төп ҡаршылыҡ - беҙ үҙебеҙ. Ошо турала уйланайыҡ әле.

**"Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы" проекты тиҙ генә әҙерләнде түгелме? Бындай программа бит йылдар дауамында эшләнергә тейеш. Быны нисек аңлатаһығыҙ?**

**И. Кинйәбулатов:** Беҙ әлеге Стратегияға дөйөм эштәрҙе индермәйбеҙ. Беҙ бында аныҡ маҡсаттарҙы алып, уны башҡарыуға индивидуаль программалар булдырабыҙ. Унан йәйләп был йүнәлештәрҙең тармаҡтары барлыҡҡа киләсәк һәм һәр тармаҡ үҙ тармаҡтарын асып дауам итәсәк.

Программабыҙға шулай уҡ ҡайһы бер төшөнсәләргә ҡарата яңыса ҡараш ҡабул итеү, үҙанды үҙгәртеү кеүек һорауҙар ҙа индерелә. Мәҫәлән, башҡортлоҡтоң асылын яңынан билдәләргә кәрәк. Юғиһә, һуңғы йылдарҙа башҡортлоҡ мәҙәни өлкәгә генә ҡайтарып ҡалдырылды. Был һорау асыҡ тора. Унан һуң, "әҙәби тел" тигән төшөнсәне лә яңынан тикшереп ҡарау зарур. Байтаҡ

*ӘЙТӘГҮР!*

**V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында күтәрергә кәрәкле тип һанаған иң мөһим мәсьәлә ниндәй?**

# КӨСЛӨ БУЛАЙЫҠ!

***Ҡәҙим АРАЛБАЙ, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Башҡорт халҡының алдынғы ҡарашлы зыялылары тарафынан ойошторолған тәүге ҡоролтайҙар рус инҡилабы осоронда милләттең идеологиксәйәси үҙәгенә әйләнеп, Рәсәйҙең беренсе автономияһына нигеҙ һала. Халҡыбыҙҙың милли үҙаңын тергеҙеү, уны үҙ азатлығы өсөн көрәш юлына сығарыуҙа ошо ҡоролтайҙар этәргес көс була. 90-сы йылдарҙа халҡыбыҙҙы туплауҙың ошо формаһы ҡайтанан тергеҙелде. Әле уҙғарыласаҡ Бишенсе ҡоролтайҙы ла халҡыбыҙҙың үҙ аллылығын, милли булмышын яҡлау һәм һаҡлау хәрәкәтененең дауамы итеп ҡарарға кәрәк. Сәйәси ситуация үҙгәреүен иҫәпкә алып, беҙ яңы маҡсаттар ҡуйырға бурыслыбыҙ. Мәҫәлән, башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ хоҡуҡи статусы нығытылды, әммә уны үҫтереүҙе яңы йөкмәткеле ғәмәлдәр менән бойомға ашырыу фарыз. Башҡорт телен ғаилә теленә әйләндерә алмаһаҡ, уның дәүләт теле булараҡ та абруйын күтәреү мөмкин булмаясаҡ.

***Эльбрус НИҒМӘТУЛЛИН, Рәсәйҙең иң көслө кешеһе, Силәбе өлкәһе:*** Бөгөн ниндәйҙер проблемаларыбыҙ бар икән, мәҫәлән, балаларыбыҙ туған телен белмәй, тип зарланабыҙ икән, бында үҙебеҙҙән башҡа бер кем дә ғәйепле түгел. Әгәр ҙә белемебеҙ юҡ икән, әгәр беҙ көслө түгел икән - ул сағында беҙ кемгә кәрәк һуң? Конкуренцияны күтәрә алмаған, әлбиттә, эргәбеҙҙә йәшәгән башҡа милләттәр беҙҙе йотоп бөтәсәк - был тәбиғәт законы. Әйҙәгеҙ, улай булғас, башҡорт ул аҙ һанлы милләт, уларҙың шундай данлы тарихы бар, уларҙы гел генә кемдер буйһондорорға тырышҡан, тип үҙебеҙҙе ҡойма менән уратып алайыҡ. Балаларыбыҙҙың белеме булмаһа ла, уҡыу йорттарына индерәйек, ярыштарҙа көсһөҙ генә булһа ла, башҡорт булғаны өсөн еңеүсе тип атайыҡ, түштәренә миҙал эләйек. Тик был рәүешле яһалма шарттар тыуҙырып ҡына милләтте күтәреп булмай, ул ҡаты көрәш шарттарында ғына көслөгә әүереләсәк. Бына мин башҡорт булған өсөн генә башҡорттар араһында ярышып йөрөһәм, бөгөн яулаған уңыштарыма өлгәшкән булыр инемме? Стронгмен буйынса үҙемдән 100 килограмға ауыр, бер башҡа бейегерәк булған спортсылар менән көрәшәм, әлбиттә, гел еңмәйем, шулай ҙа иң көслө ун спортсы исемлегенә инәм. Миндә аҙ һанлы халыҡ комплексы юҡ, киреһенсә, мине күргәс тә "О, башҡорт!" тип торалар, туғандаш халыҡтар барыһы ла, һин беҙҙеке, ти, барыһының да Башҡортостанды килеп күргеһе килә. Мин көслө һәм шуға ла мин барыһына ла ҡыҙыҡлымын. Эйе, бик еңел булмаған заманда йәшәйбеҙ, әммә беҙгә үҙебеҙҙе һаҡлап ҡалырға кәрәк, шуға ла белемле һәм көслө булайыҡ. Беҙ һәр ваҡыт терәлер өсөн көслө иң эҙләйбеҙ. Кешенең тәбиғәте шулай - ул көслө кеше менән бергә булырға ынтыла. Шуға ла тағы берҙе ҡабатларға мәжбүр булам: милләттәштәребеҙ араһында бар йәһәттән дә көслө, улар менән маҡтанырлыҡ, ғорурланырлыҡ шәхестәр булырға тейеш. Ул сағында башҡорт булмағандар ҙа, мин башҡорт, тип әйтәсәк. Ошо турала ла һөйләргә кәрәк милләттәштәр йыйылған урындарҙа.

***Илдар ЗӨЛҠӘРНӘЙ, иҡтисад фәндәре докторы:*** Ауыл хужалығы өлкәһендәге проблемаларға ныҡлап йөҙ бороу кәрәк. Был өлкәлә хәл ителә торған проблемалар былай ҙа күп һәм улар тағы ла артасаҡ. Бөгөн ауыл хужалығы та-

*✓ Мин сит илдәрҙә, сит халыҡтар менән күп аралаштым һәм башҡорттоң уларҙан өҫтөн булған сифаттары күп икәнен аңланым. Шунлыҡтан, мин милләтемдең әле алда матур киләсәге бар икәненә ышанам.*



ҡына диалект һөйләшле милләттәштәребеҙ бары әҙәби телдә ҡабул итә алмауҙары арҡаһында ғына милләттәш булыуҙан төшөп ҡала бара. Шулай уҡ беҙгә файҙаһыҙ булған ҡайһы бер нәмәләрҙән дә арынырға кәрәк.

Әлеге стратегияны халыҡ үҙе төҙөй. Ултырыштарҙа, ғалимдарҙан тыш, төрлө өлкә хеҙмәтсәндәре, студенттар, эшҡыуарҙар ҡатнаша. Улар стратегияны халыҡҡа яҡын көсәгән һәм ҡайғыртҡан төркөм һәм ойошмаларҙың сәләмәт булған бөтөн фекер һәм тәҡдимдәрен дә ишетәбеҙ.

**И. Кинйәбулатов:** Бөгөн милләт кимәлендәге лидерлыҡҡа өлгәшеү өсөн сикләнгән ҡарашлы булыу ярамаҫ ине. Әгәр һин халыҡҡа тәҡдим иткәнеңде айырым бер сиктәргә генә индереп ҡуяһың икән, унда шул сиктәргә күнгән кешеләр генә киләсәк. Шулай уҡ халыҡты баҫып

**милләтселек, ихтилалсы холоҡо булырға тейешме?**

**Д. Ғәйнуллин:** Бындай холоҡ кешелә ваҡыт үтеү, тәжрибә туплау менән генә үҫешмәй, ә кеше әлеге фиғеле менән тыуалыр. Лидер була торған бала ул йәштән ихтилалсы була. Ул ғаиләлә лә, мәктәптә лә, йәмғиәттә лә үҙ аллы булырға, үҙ аллы фекерләргә һәм идеялар тыуҙырырға ынтыла.

Бөгөнгө Ҡоролтайға килгән йәштәр ҙә яҡшы мәғәнәләге туҡмайһың?" - тип һорай. "Ҡушҡанды үтәй!" - тип яуаплай икән атай кеше. "Ҡушҡанды үтәгәнгә туҡмайҙармы ни?" - тип аптырай күршеһе. "Ҡушҡанды көтмәһен, үҙе белеп эшләһен!" - тип яуаплай икән атаһы. Бөгөн дә беҙ үҙе белеп эшләргә тейеш кешеләрҙең заманында йәшәйбеҙ.

**▸ Һеҙ Ҡоролтай аппаратында икегеҙ ҙә яңы кешеләр. Ниндәй уй менән килдегеҙ бында? Башҡорт халҡының киләсәген ниндәйҙер "оһо!" тип әйтерлек ыңғайлыҡҡа йүнәлтеп, үҫештереп булыр, тигән өмөт менән килдегеҙме?**

# ҠОРҘАН... КӨТӨП

итә лә инде. Беҙ проектты артыҡ ҡатмарлаштырмау, аңлайышһыҙ һәм ауыр итеп күрһәтмәү яҡлы. Был программаның әле һөлдәһе генә була. Ә уның йөкмәткеһен, ғәмәлгә ашырыу формаларын алдағы йылдарҙа бергәләп билдәләйәсәкбеҙ.

**▸ Бөгөн башҡорт донъяһында милли мәнфәғәттәге лидер булырға ынтылған төркөмдәр бер нисә булып китте. Ҡарап торһаң, улар ҙа бик файҙалы эштәр башҡара кеүек. Стратегия төҙөгәндә улар ҡатнаша алдымы?**

**Д. Ғәйнуллин:** Дөрөҫөн генә әйткәндә, беҙ "стратегия" тип ауыҙ асҡас, күптәр ышанмай ҡараны. Тик тора-бара был эшкә ябай халыҡ та ҡушылғас, төрлө йәмәғәт ойошмалары үҙ фекерҙәрен әйтеп ҡалырға, тәҡдимдәрен индерергә ынтылды. Әлбиттә, беҙ уларҙың тәҡдимдәрен ҡабул иттек һәм йыйылыштарға ла саҡырҙыҡ. Шулай уҡ дини ойошмаларҙың да кәңәшен ишеттек. Дөйөм алып әйткәндә, башҡорт халҡының яҡшы киләсәген һындырып, мәжбүр итеп тә тотоп булмай бөгөн. Бөгөн халыҡҡа ҡыҙыҡлы һәм аңлайышлы булыу мөһим. Консерватив ҡарашлы ойошмалар барыбер тарих боролоштарында тороп ҡаласаҡ. Быны тарих үҙе күрһәтеп тора.

**▸ Данир Әхмәҙи улы, бына һеҙ, белеүебеҙсә, йәш ваҡытығыҙҙан милли хәрәкәттә йөрөгән кеше. Суверенитет даулап пикеттарҙа, митингыларҙа йөрөүсе, аслыҡ иғлан итеп ятыусыларҙың да береһе һеҙ. Һәм бөгөн килеп Ҡоролтайҙы етәкләүегеҙ ҙә осраҡлы түгел һымаҡ. Нисек уйлайһығыҙ, беҙҙең заман ҡоролтайсыһында ниндәйҙер кимәлдә** "революционер" булырға тейеш. Әгәр улар йәмғиәтте үҫтерергә ынтылмаһа, уларҙан ни файҙа? Ҡоро исем тағып йөрөүселәр, фекерһеҙҙәр, ҡурҡаҡтар беҙгә кәрәкмәй. Беҙҙең эш пикет-маҙар ойоштороуҙа ғына түгел, ә аҡыл менән, белем менән алға барыуҙа бөгөн. Хатта Ҡоролтайҙы карьера баҫҡысы итеп ҡараусы йәштәр ҙә булһын. Амбициялы булыу ул үҙе үк бер ныҡлы характер билдәһе. Ҡушҡанды ғына үтәп йөрөүгә ҡарағанда, үҙең белеп эшләй белеү күпкә файҙалыраҡ. Бер башҡорт мәҫәленә ошондай мәғәнә һалынған. Атаһы улын туҡмай икән, күршеһе "Ниңә



*Стратегия - ул башҡорт халҡының киләсәген аныҡ программала кәүҙәләндерә торған документ буласаҡ. Башлыса йәштәр өсөн эшләнәсәк ул. Шунлыҡтан, йыйын делегаттарының утыҙ проценты йәштәр булырға һәм улар үҙ тәҡдимдәре менән килергә тейеш, тип теркәп ҡуйылғайны положениеға. 90-сы йылдарҙа ҡабул ителгән ҡарарҙар иҫкергән инде, бөгөнгө заманға ярашлы икенсе ҡараш, икенсе төрлө йүнәлештәр талап ителә. Проект бөгөнгә түгел, ә киләсәккә күҙаллап ҡоролған. Ә киләсәк ул - тап бөгөнгө йәштәр.*

**И. Кинйәбулатов:** Мин республикабыҙға яңы етәкселек килеп, төптән атҡарылған үҙгәрештәр башланыуын белгәс, Мәскәүҙән ҡайттым. Был үҙгәреш елдәрен милләт мәнфәғәттәрендә файҙаланып ҡалырға кәрәк. Әлбиттә, беҙҙең халыҡтың уңышлы һәм уңышһыҙ яҡтары ла бар, әммә уның потенциалы шундай ҙур. Йәш булһам да, мин сит илдәрҙә, сит халыҡтар менән күп аралаштым һәм башҡорттоң уларҙан өҫтөн булған сифаттары күп икәнен аңланым. Шунлыҡтан, мин милләтемдең әле алда матур киләсәге бар икәненә ышанам.

**Д. Ғәйнуллин:** Мин Ҡоролтай Башҡарма комитеты ағзаһы булдым быға саҡлы ла, ғөмүмән, Ҡоролтай сәйәсәтендә ҡарт бүре тип иҫәпләйем үҙемде. Нисә тапҡыр бер тырмаға баҫһам да, әле һаман да шул уҡ тырмаға үҙ теләгем менән килеп баҫырға торам. Сөнки милләтемә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә бер ваҡытта ла битараф ҡала алманым. Ә бөгөн беҙҙән икеләтә, бишләтә уяуыраҡ һәм сапсаныраҡ булыу талап ителә. Республикабыҙҙың яңы етәксеһенең республиканы, халыҡты үҫтерергә теләген күтәреп алырға, бергә булырға, ярҙам итергә кәрәк. Шундай әүҙем һәм рухлы, эшлекле һәм аҡыллы кешенең артынан бер уйһыҙ, ҙур ышаныс менән эйәрәм һәм быларҙың барыһын да үҙ милләтемә лә аңлатырға теләйем. Беҙ был ваҡытта бер уйҙа һәм бер һүҙҙә булып, алға ынтылырға бурыслы. Шундай һынылышлы мәлдә милләт мәнфәғәтен алға ҡуйыусы барса йәмәғәтселәр ҙә, дин әһелдәре лә, башҡа зыялыларыбыҙ ҙа, заман тулҡынын эләктереп алып, әүҙем хәрәкәт итеп ҡалырға тейеш. Торғонлоҡто аҙ кисермәнек, әле башланып ҡына торған үҫеш осорон тулыһынса файҙаланып ҡалайыҡ, туғандар, тием.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡоролтай алдынан барыбыҙҙың да күңел түрендә яңы, өмөтлө уй-хыялдар ярала, пландар ҡорола, шунһыҙ яңырыу ҙа булмаҫ ине. Оло ҡорҙоң уңышлы үтеп, милләтебеҙгә файҙалы емештәр биреүен теләйек.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА** **әңгәмәләште.**

---

уарҙарын етештереү һөҙөмтәле түгел, тигәндә, яғыулыҡтың ҡиммәт булыуына, хеҙмәтте ойоштороу түбән булыуына, ауыл хужалығы технологияларының артта ҡалыуына һәм тәбиғәт шарттарына һылтаналар. Үҙемдең күҙәтеүҙәремдән сығып, шуны әйтергә мөмкин: хатта глобалләштереү шарттарында конкурентлыҡҡа һәләтле хеҙмәт ойоштороrға була. Минең баһам буйынса, тәбиғи фактор төп урында тора алмай, иң мөһиме, технологиялар һәм хеҙмәтте ойоштороу. Бының өсөн тәүҙә халыҡтың менталитетын үҙгәртеү кәрәк. Һуңғы тиҫтә йылдар эсендә колхоз-совхоздар ҙа юҡҡа сыҡты. Иғтибар итһәгеҙ, коллектив хужалыҡтар бөтә донъяла: АҠШ-та ла, Европала ла бар, тик уларҙың формаһы ғына төрлөсә. Башҡорт халҡы ла борон-борондан эште күмәкләп эшләгән. Шуға ла мин ауыл хужалығының киләсәген тик коллектив формала ғына күрәм. Тик ул совет заманындағы кеүек түгел, ә яңыса булырға тейеш. Мин Америка университеттарында белем алып, унда коллектив хужалыҡтарҙың тәжрибәһен өйрәнгән кешеләрҙе беләм. Ҡыҙғанысҡа күрә, Рәсәйҙә, хатта беҙҙең республикала ла бындай тәжрибә Хөкүмәт тарафынан ҡулланылмай. Бәлки, яңы етәкселек был тәжрибәне ҡулланып, ауыл хужалығын модернизациялау юлдарын хәл итергә тырышыр, тип ышанам.

***Радик ӨМӨТҠУЖИН, Әбйәлил районы Хәлил урта мәктәбе уҡытыусыһы:*** Халҡыбыҙҙа берҙәмлек булһа, милләтебеҙ алдындағы барлыҡ мәсьәләләр ҙә хәл ителер ине. Шуға күрә был ҡоролтайҙа мин ошо юҫыҡтағы мәсьәләләр күтәрелеүен теләр инем. Үкенескә күрә, халыҡтың берҙәмлеген закондар ярҙамында ғына ойоштороп булмай шул. Беҙ күберәк рәсми эштәр менән шөғөлләнәбеҙ буғай, халыҡтың үҙе менән эш итеү һүлпән ҡуйылған. Шул уҡ ваҡытта халыҡ менән эш итеү алымдары закон менән һәр саҡта ла тап килмәүе лә бар. Дәүләт Думаһында күпселекте тәшкил итеүсе "Берҙәм Рәсәй" фракцияһының федерация составындағы республикалар, уларҙа йәшәүсе милләттәр хоҡуҡтарын бик үк иғтибарға алмауы бер кемгә лә сер түгел. Шулай булғас, ҡоролтайҙа күтәреләсәк иң мөһим мәсьәләне мин республикабыҙҙы, Рәсәй федерализмын һаҡлап ҡалыу юҫығында күрәм. Беҙ - Рәсәй федерализмы плацдармы һәм беҙҙең республика менән үҙәктең мөнәсәбәте Рәсәй федерализмы киләсәген дә билдәләйәсәк. Беҙ республикабыҙҙан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең рухи халәте менән бик яҡшы танышбыҙ, улар йылдан-йыл үҙ милли асылынан ситләшә, башҡа милләт мәҙәниәте йоғонтоһона бирелә. Рәсәй Федерацияһы закондары уларҙың рухи донъяһын һаҡлауға, үҫтереүгә хеҙмәт итмәй. Ошо миҫал нигеҙендә генә лә беҙ үҙебеҙҙең алда торған иң мөһим мәсьәләне бик тәрән аңлайбыҙ.

***Спартак ИЛЬЯСОВ, йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы:*** Иң элгәре ҡоролтайыбыҙҙа Рәсәйҙең дәүләт ҡоролошоныҫын федерализм принциптарына ярашлы итеү маҡсатында эш алып барыу тураһында ҡарарҙар ҡабул итеү мөһим. Ни өсөн? Бөгөн федераль үҙәк үҙе үк федерализм ҡанундарын инҡар итеүсе ғәмәлдәрҙе хуп күрә. Ниндәй генә федераль закондарҙы алып ҡарама - ер мөнәсәбәттәрен көйләү, ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу хаҡындамы ул, "Һыу кодексы"на ҡағылғандарынмы, дәүләттең власть вәкәләттәрен бүлешеү тураһындағынмы, мәғариф өлкәһе буйынса ҡабул ителгәндәренме - уларҙың барыһында ла үҙенең тарихи ерендә йәшәүсе милләттәрҙең хоҡуҡтары ҡыҫыла, йәиһә бөтөнләйгә иғтибарға алынмай. Хатта батша Рәсәйендә лә аяуһыҙ баҫымға дусар ителеүгә ҡарамаҫтан, башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғы һаҡланып килде, ә бөгөн халҡыбыҙ үҙ еренә үҙе хужа түгел. Тимәк, был хаҡта халҡыбыҙ үҙ дәғүәһен федераль үҙәккә еткереп, законлы талаптарын үтәүҙе ҡәтғи рәүештә белдерһә, ошо өлкәлә алға китешкә өлгәшер инек. Был ҡоролтайыбыҙҙың бәҫен бермә-бер күтәрер ине. Беҙ халыҡ булараҡ ошо ерҙә бар булғанбыҙ, унан бер ҡайҙа ла китергә йыйынмайбыҙ, ошонда мәңге йәшәйәсәкбеҙ. Беҙ бер ҡасан да федерализмға, тимәк, Рәсәйгә ҡаршы сығыусылар менән бер рәткә баҫмаясаҡбыҙ. Бишенсе ҡоролтай делегаттары ошолар хаҡында ҡыйыу рәүештә сығыш яһап, ошо юҫыҡта үҙгәрештәргә юл асһа, үҙенең тарихи ролен үтәйәсәгенә шик булмаҫ.

***✓ Быңдайҙы көтмәгән Люба менән Рамаҙан, ҡапыл албырғап ҡалып, егет кәрзин артынан һикергәндә, һуң ине инде. Кәрзин шәп тиҙлектә тәкмәсләп барып ярҙан аҫҡа осоп төшөп тә китте.***




- Ромка, һин бит минән арыуыҡҡа йәш, шуға ҡусты күреп әйтәм, нимәгә һиңә шул һепертке? - тине ул ҡыҙҙы өйөнәсә оҙатып килгән егетте ишек төбөндә туҡтатып. Үҙе Рамаҙандың яуабын көтөп тә тормай, дауам итте:

- Ул бит командирҙарға һөйәркә булып йөрөгән. Һуғышҡан шулайтып. Тоже файҙа инде, тик нимәгә уны ҡарауыллап алып тик йөрөйһөң? Әйҙә, беҙҙең менән дә бүлеш. Беҙ командирҙарҙан кәм булмаҫбыҙ ул, - тип тартыуҙан ҡарлыҡҡан тауыш менән ғырҡылдап көлөп тә маташты.

Сикә тамырҙары шартларҙай булып бүртеп сыҡһа ла, һыңар ботло ҡолғаны аяҡ бөгәренән эләктереп ҡолатыу ҙа, өҫтөнә һикереп менеп төйгөсләү теләге ялмап барһа ла, егет тыныс ҡына итеп бер ауыҙ һүҙ менән яуапланы ла китте:

- Булһа һуң!

Әммә бер нисә көндән һуң әлеге әҙәм аҡтығын шул урында иҙгәнсе тапамағаны өсөн ергә ятып үкенерҙәй булды Рамаҙан. "Самауырҙарҙы" һәм үҙ аллы хәрәкәт итә алмаған ауыр ауырыуҙарҙы саф һауала йөрөтөү мәле ине. Люба менән икәүләшеп, ғәҙәтенсә, Антошканы алдылар. Был күңелсәк егет уларҙың араһында ултырып, бала һымаҡ ҡыуана, көлдөрә, йырлап та ебәрә, үҙен былар ҙа ярата, Антошка ла Любанан түңәрәк күҙҙәрен айыра алмай торған була. Яратҡан урындарында, текә яр башындағы түбәләстә ултыралар ине, эргәләренә хәйерһеҙ шул Серый килеп баҫты. Тәмәкеһен һурып бөтөп сиртеп осорҙо ла, Любаға өндәште:

- Туташ, аҙыраҡ атлап киләйек әле, әйтер һүҙем бар.

Люба ҡымшанманы ла. Сергейҙың бәйләнеүенән ул инде йөҙәп бөткән, яусыларын да әллә нисә ҡат кире ҡаҡҡан ине.

Ҡыҙ яуап бирмәгәс, быларға мөрәжәғәт итте:

- Йөрөп килерһегеҙ, бәлки?

Рамаҙан уйлап өлгөргәнсе, Антоша яуапланы ла:

- Тағы нимә? Сылғауыңды елләтеп бирмәйекме? - Үҙе кәрзин эсенән ҡалҡып торған башын ике яҡҡа борғолап кеткелдәп тә алды.

- Һин, орсоҡ, тик кенә ултыр, - Серыйҙың да тауышы ҡатыланды. Үҙе һаман китмәй ныҡышты. - Йә, Люба, баш эйәйемме инде һиңә?

Люба уға боролоп, аҫтан өҫкә ҡараны:

- Кәрәкмәй. Баш эйеүең дә кәрәк түгел, хәбәрең дә кәрәк түгел. Үҙ юлың менән бул, Сережа, мине борсома.

- Люба... - тип тағы ла ауыҙын асҡайны ғына Сергей, уның тиҫкәрелегенә сабырһыҙланған Антоша ҡысҡырып та ебәрҙе:

- Кит тинеләр бит һиңә! Китеп ултыр!

Шул ваҡыт Сергей, ярһыуын кемгә төшөрөргә белмәй торған еренән әмәлен тапҡандай, һыңар ҡултыҡ таяғы менән киҙәнеп тороп Антоша ултырған кәрзингә һуҡты ла ебәрҙе. Түңәрәк төплө кәрзин эсендәге йөгө менән туп шикелле булып аҫҡа тәгәрәне. Быңдайҙы көтмәгән Люба менән Рамаҙан, ҡапыл албырғап ҡалып, егет кәрзин артынан һикергәндә, һуң ине инде. Кәрзин шәп тиҙлектә тәкмәсләп барып ярҙан аҫҡа осоп төшөп тә китте. Уның артынан ынтылып, шулай уҡ аунап-тәгәрәп килгән Рамаҙан, ҡулдары менән ерҙе тырнап тигәндәй барып, яр ҡырына етәрәк туҡтала алды. Люба ла ҡултыҡ таяҡтарһыҙ аҫҡа шыуыша, үҙе яр яңғыратып сарылдай ине:

- Антоша! Антошка, ҡәҙерлем! Ярҙам итегеҙ! Үлде! Үлде инде! Үтенәм, ярҙам итегеҙ! Рома! Антоша-а-а! А-а-аһ!

Яҡын тирәлә йөрөүселәр, унан санитарҙар йүгерешеп килгәнсе күпме ваҡыт үткәндер, Рамаҙан менән Любаны һөйрәп сығарғансы, табиптар ҡулында тыйып алғыһыҙ булып илап тулаған ҡыҙҙы тынысландырғансы хәтһеҙ ара уҙғандай тойолдо. Ул арала Сергейҙың был тирәнән юҡҡа сығыуын берәү ҙә күҙгә элмәне. Уның ҡайғыһы ла түгел ине шул. Хәлде аңлаған һаҡсылар ҡапҡа аша сығып, урау юлдан яр аҫтына ҡарай йүгерҙеләр һәм тағы ла ғазаплыраҡ булған хәтһеҙ мәлдән күн плащҡа һалынған ҡанлы тән киҫәген күтәреп алып килделәр. Антошаның бит-күҙәһе ҡан ҡатыш тупраҡҡа, ҡомға буялған да, алыҫтан ул бер ағас киҫәге кеүек кенә булып ята ине. Был хәлде күргән Люба тағы үкһене:

- Антоша! Нимешләттеләр һине, туғанҡайым минең?.. Антоша!

Рамаҙан һаҡсыларҙың алдағыһына һораулы ҡарашын күтәргәйне, уныһы әкрен генә баш сайҡаны.

- Ы-ых! - Рамаҙан йоҙроғон йомарлап ергә һуҡты ла, арбаһында ҡырт боролоп, казармалар яғына елдерҙе. Ниәте Серыйҙы табып, алҡымын сәйнәү ине. Тик енәйәтсе бүлмәһендә лә, башҡа урындарҙа ла, хатта пансионат урамында ла табылманы. Оҙаҡламай уны эҙләүгә барыһы ла ҡушылды, бет итеп тентенеләр ҡоролмаларҙы, әммә зым-зыя булды ла ҡуйҙы ҡасаҡ. Икенсе көн урманға, яҡын ауылдарға ҡоралллы һаҡ патруль яһап әйләнде, тик Серыйҙың эҙе табылманы. Ә Антошаны алыҫ булмаған урман аҡланына алып барып ерләнеләр. Уның ҡәбере киләһе йылдарҙа киңәйә һәм ҙурая барасаҡ пансионат зыяратының тәүге кәртәле ташы булды.

Ошо ҡайғынан халыҡ тынысланып та өлгөрмәне, уларҙы ҡуҙғытҡан тағы ла бер көтөлмәгән хәл килеп сыҡты. Пароход күлдән үтеп киткәс, барыһы ла урамда йөк машиналарын көтә ине. Бер машинаның кабинаһынан төшкән хәрби йәш ир үләнгә сумаҙанын ҡуйып, янъяғына ҡаранып торғанда, Рамаҙанды ҡултыҡлап тигәндәй йәнәшәһендә ултырған Люба үҙәк өҙгөс тауыш менән һөрәнләп ебәрҙе:

- Макси-им! Максимка!

Үҙе ҡысҡырған ыңғайы тороп йүгермәксе булып ынтылды ла, таяҡтарында буталып һөрлөктө. Ярай әле Рамаҙан ынтылып, терһәгенән эләктереп өлгөрҙө. Тик ҡыҙ уның ҡулынан да ысҡынып талпынмаҡсы. Ул арала хәрби йүгереп килеп ҡыҙҙы күтәреп тә алды. Ҡултыҡ таяҡтары кәрәкһеҙ булып, ҡолашып ҡалдылар. Итәктәрен йәлпелдәтеп, берике ҡат әйләндерҙе, унан ергә баҫтырҙы ла, ике сикәһенән алмашлап үпте, унан тағы күкрәгенә ҡыҫты, тартыла биреп төбәлде лә тағы үпәсләне. Люба ла уға сат йәбешеп, берсә иланы, берсә көлдө. Уларҙы күҙәткән бер өйөр асыҡ ауыҙҙар "Был кем икән?" тип юрағансы, ҡыҙ күҙ йәштәрен һөртә-һөртә, ҡалтыранған тауыш менән:

- Ҡустым был минең! Берҙән-бер туғаным! Күрәһегеҙме? Иҫән! Иҫән! - тип иғлан итте лә, унан тағы үкһеп егеттең түшенә ауҙы.

Киске аштан һуң Люба ҡустыһын Рамаҙан, Василийҙар менән таныштырҙы, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар. Максим йәшерен хәрби хеҙмәттә булған икән, был хаҡта туғандарына белдерә алмаған, апаһына хәбәр ебәреү ҙә тыйылған. Һуғыштан һуң да сит илдәрҙә йөрөгән, хеҙмәтен үтәгән. Ике ай элек ҡайтып төшһә, фатирҙарында икенселәр көн итә, ғаилә ағзаларының ҡайҙалығын белгән кеше юҡ. Таныш-белештәре буйлап йөрөп һораша торғас, эҙенә төшкән апаһының. Ваалам тураһында оло ерҙә бөтөнләй мәғлүмәт табыуы ауыр икән, шулай ҙа Максим асыҡлай алған һәм, бына, апаһын килеп табып ултыра.

## Матрос

Пансионаттың иң абруйлы кешеһе ул Матрос. Һәм иң олоһо ла. Документы буйынса уға һикһән тулып килә. Үҙе әйтеүенсә, унан да күберәк. Ул тауҙарҙа тыуған һәм ата-әсәләре тауҙан төшөп, ауылға килеп документ яҙҙырғансы бер нисә йыл үтеп киткән. Метриканы үткән заман менән бирмәгәндәр һәм чабан ғаиләләре бер-бер артлы тыуған балаларын шулай өсәр-дүртәрен бер йылғы итеп теркәгән дә киткән. Иҫләүе буйынса һөйләгәне дөрөҫ булһа, Ҡара диңгеҙ тәңгәленән күтәрелгән мәғрүр тауҙар буйлап түбәһендә мәңгелек боҙ ятҡан үрҙәргәсә үрләргә кәрәк булған уларҙың ҡышлағына. Үҫмерлек осорона еткәнендә әсәһе ауырып үлеп ҡалғас, атаһы ун алты балаһын эйәртеп тауҙан төшөп, диңгеҙ эргәһендәге балыҡсылар ауылында көн итә башлай. Унда икенсе ҡатын алып, уныһынан тағы ла һигеҙ балаһы донъяға килә. Шул ерҙән, 1904 йылда, егерме йәшлек абхаз улы Батал Зухбая Урыҫ-япон һуғышына алына. Унда йөрөп, имен-һау ҡайтып өйләнә лә, утыҙ йәштәр самаһында, ике улы менән ҡатынын ҡалдырып, Беренсе донъя һуғышына саҡырыла. Ғүмере булғас, уныһынан да бер ере лә сыйылмай әйләнә Батал, күкрәгән ике Георгий Тәреһе биҙәй. Ҡайтып, күнегелгән балыҡсылыҡ кәсебенә тотона һәм тағы ла өс малайға атай була. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, уның башлы-күҙле булып йәшәп ятҡан биш улы ла бер-бер артлы фронтҡа алына. Һәм ҡара ҡағыҙҙары ла бербер артлы килә... Өсөнсөһөнөң ҡара ҡағыҙын бисара ҡатыны күтәрә алмай, улдарының хаттарын ҡосаҡлап, янып бөткән майшәмдәй генә булып һыҙылып ятып йән бирә. Тағы икеһенең ҡағыҙын бер үҙе ҡабул итә ҡарт һалдат. Унан балаларының үлем хәбәрҙәрен йыйнап, түш кеҫәһенә һалып ала ла, Ҡара диңгеҙ флоты портына барып, хеҙмәткә алыуҙарын һорай. Документтарына ҡарап, уға "61 йәш - олоһоң" тиҙәр. Шул ваҡыт Батал ҡабул итеүсе командирҙың алдына "Аслан, Беслан, Баград, Барнук, Архас..." тип исемләп биш ҡара ҡағыҙҙы сығарып теҙеп һала ла, уҫал ҡарап өҙөп әйтә: ал!

Баталды флоттың хужалыҡ эштәренә хеҙмәткә алалар. Ул йә ашханаға аҙыҡ-түлек ташышыуҙа, йә иң аҫтағы ҡатта тимер-томор майлауҙа, йә яғыуға күмер алып килеүҙә йөрөй. Әллә нисә тапҡыр лайнерҙарҙы хәрби заданиеларға оҙата ла, көтөп ала алмай. Балалары кеүек күреп эҫенеп бөткән егеттәрҙе арҡаларынан ҡағып тороп ҡала ла, офоҡҡа ҡарап ҡоро бушҡа күҙҙәрен талдыра. Уландарын һағынып, оҙон тау йырҙарын һуҙа ҡарт, йәш матростарҙы юҡһынып, уларҙан өйрәнгәндәрен йырлай:

*Раскинулось море широко,*
*И волны бушуют вдали...*
*Товарищ, мы едем далёко,*
*Подальше от этой земли...*

1944 йылдың көҙөндә, ул тирәлә инде фашистың еҫе лә ҡалмаған мәлдә, совет хәрби диңгеҙ техникаһын юҡ итеү маҡсаты менән ебәрелгән немец разведчиктарының мәкерле планы ҡорбаны була ҡарт матрос. Көҙгә иртәлә, портта тыптыныс торған лайнерҙарҙағы шартлау тауышы барлыҡ хәрби көстө аяҡҡа баҫтыра. Хәрби флоттың ҙур өлөшө пехота менән берлектә дошманды ҡыуып киткән дә, бында техниканы һаҡлауға бер өлөш кенә ҡалдырылған була. Иң беренселәрҙән булып килеп еткән Батал ут эсендә сәсәй-сәсәй йөрөп яралыларҙы ҡотҡара, эстәге юлдарҙы, каюталар нисек урынлашыуын яҡшы белгәс, өҫтөнә һыу ҡоя ла инеп сума, сығып аҙыраҡ тын ала ла, тағы инеп юғала. Сираттағы инеүендә үҙе лә емереклек аҫтына ҡалып боттарын иҙҙерә. Шунда ла шыуышып сығып етеп, иҫен юя һәм аяҡтарһыҙ көйө аңына килә. Рамаҙандан айырмалы рәүештә, аяҡтары өсөн артыҡ борсолмай Батал, уны иң аптыратҡаны һаман йәшәүе, һаман тере ҡалыуы була. "Ни өсөн минең арыҫландай биш улым үлде лә, ни сәбәптән анау сама йәш малайҙар ҡырылды ла, мин өсөнсө һуғышты үтеп йәшәйем?" тип баш вата ул. Ошо уҡ һорауын ағас йышыуынан туҡтап, уйланып ултырып, Рамаҙанға ла йыш бирә ҡарт. Бөркөт танауы өҫтөндә килеп ҡушылған ялбыр аҡ ҡаштарын һындырып, төҫө уңған, әммә үткерлеген юғалтмаған асыҡ күк күҙҙәрен зәһәр яндырып ҡарап һорай: ни өсөн улай, был бит яңылышлыҡ, улай булырға тейеш түгел, ти. Рамаҙан һәр ваҡыттағыса яуапһыҙ, ҡарап ҡына ҡуя ҡартҡа. Ә ул кәкере бармағын өҫкә төбәп күрһәтә лә, яуабын үҙе үк әйтә: Ул ғына белә...

Һуғыш бөтөр-бөтмәҫтән Ҡара диңгеҙ ярында һәм шул территорияла йәшәүсе абхаз, ҡалмыҡ, ингуш, чечен, балҡар, ҡарасәй, нуғай, ҡырым татарҙары кеүек 61 төрлө милләтте тыуған илдәренән көсләп күсереү башлана. Халыҡты тәүлек эсендә йыйындырып алып, илатыпбуҙлатып вагондарға тейәйҙәр ҙә, Алыҫ Көнсығыш, Ҡаҙағстан һәм Үзбәкстан далаларына алып барып ауҙаралар. Ираты һуғышта булып ҡалған йәки ошо уҡ Ватан өсөн ҡорбан булғандарҙың бисәсәсәһен, бала-сағаһын һәм ҡарт-ҡороһон ете ят яҡтарға алып барып олаҡтыралар. Уларҙың күбеһе юлда аслыҡтан үлә, үлгәндәрҙе туҡтап та тормайынса поездан ырғытып китәләр, тимер юлы буйында ташландыҡ кәүҙәләрҙе ерләүсе махсус отрядтар булдырыла хатта һәм 1943-1946 йылдарҙа был юлдар исемһеҙ зыяраттар менән тула. Бары тик алтмышынсы йылдарҙан һуң ғына туҙҙырылған халыҡтарҙың ҡалған күпмелер өлөшө үҙ төбәктәренә ҡайтыу хоҡуғын ала.

Был буталышта Баталдың да аталаш булған егерме өс туғаны, уларҙан таралған ике йөҙләп заты һәм улдарының аманаты - ике тиҫтәгә яҡын ейәндәре сәс-баш булып туҙып-юғалып бөтә. Батал һәм уның малайҙары яҡлап ҡан ҡойған ил ни эшләптер шулай аямай уларҙы, ниндәйҙер гонаһтары өсөн һаман-һаман, ҡайта-ҡайта хаҡ түләтә...

**(Дауамы бар).**

# БАЙМАҠТАРСА БУЛДЫ!



**Беҙҙә һабантуйҙар бер төрләрәк сценарий буйынса үтә, әлбиттә. Иң тәүҙә сәхнәгә сығарып, баш ҡаланан килгән юғары ҡунаҡҡа һүҙ биреп, йыйылған халыҡты байрам менән ҡотлаталар, шунан район кимәлендәге етәксе ауыл хеҙмәтсәндәрен тәбрикләй, бүләктәр бирә. Ҡотлауҙарҙан һуң шул уҡ ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәре, райондарҙың маҡтаулы шәхестәре, спортсылар, балалар, рәттәргә теҙелеп, парадта үтә. Артабан иһә матур концерт программаһы башлана…**

Баймаҡта ла шулай башланып китте һабантуй. Әммә был юлы район сараһына ҡунаҡҡа килгән республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Фәрит улы Хәбиров һәм башҡа ҡунаҡтар әлегә башҡа төбәктәр һабантуйҙары майҙанында булмаған күркәм тамашаны - һыбайлы егеттәребеҙҙең саялығын, таçыллығын көүҙәләндергән "Ылаҡ" уйынын һәм республиканың 20-нән ашыу районынан килгән башҡорт милли кейемле ҡатын-ҡыҙҙарҙың - "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының сафтарға теҙелеп атлап үтеүен дә күҙәтте. Һабантуйҙың иң сағыу бер күренеше һәм яңылығы булды, тип баһаланы аҙаҡ байрамда ҡатнашыусылар ағинәйҙәр парадын. Ысынлап та, һәр район ағинәйҙәренең үҙ ырыуына, үҙ төбәгенә яраштыра биреп тегелгән милли кейемдәренең сағылыуы, төрлөлөгө матур бер гөлләмә хасил итеп, күҙҙәрҙе ҡамаштырҙы, һоҡландырҙы. Һабантуйға килгән һәр кем ошо ағинәйҙәр менән аралашырға, бергәләп фотоға төшөргә ашыҡты. Хатта Радий Фәрит улы ла ағинәйҙәр төркөмө эргәһенән битараф ҡына үтеп китә алманы...

Баймаҡтар байрам итә, ҡунаҡ күңелен күрә, хайран итә белә икәнен беләбеҙ. Йәгни, байрам сараһының сағыу күренеше был ғына булманы, тип әйтмәксебеҙ. Һабантуй майҙанына ингән ҡапҡа төбөнән үк ҡунаҡтарҙы балалар һабантуйы сығыштары ҡаршыланы. Бәләкәй-бәләкәй майҙансыҡтарҙы биләгән балалар халҡыбыҙҙың теге йәки был ырыуын көүҙәләндереп, йә шәжәрә һөйләй, йә шул ырыуҙарға хас һөнәрҙәрҙе күрһәтә, яндан ата, бейеп-йырлап күрһәтә. Бала кеше ошо тарихи әһәмиәтле мәғлүмәттәрҙе, халҡыбыҙҙың ҡобайыр-йырҙарын теленә индергән икән, тимәк, ул уның күңеленә лә ингән, тимәк, битараф булмаған йәш быуын үçеп килә, тигән өмөт уяна ошондай сығыштарға юлыҡҡанда. Балаларыбыҙҙы илһөйәр, телһөйәр итеп тәрбиәләүҙә тап ошондай саралар ҙа кәрәк икәнен яҡшы белә булыр Баймаҡ районының мәғариф хеҙмәткәрҙәре. Афарин уларға!

Артабан һабантуй ҡунаҡтары, тамашасылар райондың мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре һәм һәр ауыл биләмәһе вәкилдәренең, етәкселәренең тырышлығы емештәрен баһалаясаҡ. Ике тиçтәнән ашыу тирмә ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡул эштәре, ир-егеттәр кәсептәре продукцияһы, шәхси хужалыҡта етештерелгән ризыҡтар күргәҙмәләре менән биҙәлгән үҙ ихатаһында ҡабул итте ҡунаҡтарҙы. Һәр тирмәгә ҡунаҡтар делегацияһы беркетелеүе, улар өсөн башҡорт аш-һыуынан һығылып торған табын, хатта махсус тәғәйенләп күстәнәстәр, бүләктәр әҙерләнеүе - быныһы ла баймаҡтарса булды. "Беҙ, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары, ниндәй генә сара үткәрһәк, ниндәй генә районға барһаҡ та, халҡыбыҙҙың ҡунаҡсыллыҡ һәм бүләктәр менән алышыу йолаһын атҡарабыҙ атҡарыуға, әммә баймаҡтар барыһынан да уҙҙырып ебәрҙе. Хәҙер уларға тиңләшергә тырышырға кәрәк инде..." - тине аҙаҡ фекерҙәре менән уртаҡлашып Бөрйән район ағинәйҙәре етәксеһе Рәшиҙә Ғиззәтуллина.

Әйткәндәй, ҡунаҡ булып ҡына йөрөмәне ағинәйҙәр, Өфөнән улар менән осрашыуға махсус саҡырылған ҡунаҡтар - республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева, драматург, фольклорсы Сәрүәр Сурина, эшҡыуар Гөлсәсәк Әлибаева, ғалимә-психолог Лилиә Халиҡовалар менән айырым тирмәгә йыйылып, бер аҙ фекер алышырға ла форсат тапты. Ә уртаҡлашыр фекерҙәре, тәжрибәләре күп ағинәйҙәрҙең. Улар үҙҙәре лә төрлө өлкә белгестәренең кәңәштәренә мохтаж. Мәçәлән, балалар, йәштәр, ауылдаштар араһында тәрбиәүи эштәр ҙә алып барған ағинәйҙәргә яман ғәҙәттәр менән дуç булғандар, йәиһә үҙ-үҙенә ҡул һалырлыҡ хәлдәгеләр менән дә осрашырға, һөйләшергә кәрәк була. Ошондай ситуацияла үҙеңде нисек тоторға, ниндәйерәк кәңәштәр менән уртаҡлашырға һуң? Һәм тағы: ағинәйҙәр бөгөн милли кейемдәрҙе генә түгел, милли аш-һыуҙарыбыҙҙы ла тергеҙә, етештерә. Ҡул белгән оçталыҡ емештәрен башҡаларға ла тәҡдим итеп, нисек аҡса эшләргә өйрәнергә? Тағы бер мөһим мәсьәлә: бынан 8 йыл элек төҙөлгән "Ағинәй" ойошмаһы үҙ ағзаһы булыр һәр ҡатын-ҡыҙ алдына милли кейемдәр тегеп кейеүҙе, селтәр, һаҡал, яға, ҡашмау кеүек биҙәүестәрҙе тергеҙеүҙе бурыс итеп ҡуйғайны бит. Хәҙер инде һәр ауылда, һәр районда милли кейемле, биҙәүесле ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ йөҙәрләп иçәпләнә, Өфөлә үткән милли кейем парадтарында ла башлыса улар өçтөнлөк итә. Ләкин... Милли кейемдәребеҙҙә лә, биҙәүестәребеҙҙә лә етешһеҙлектәр, өләсәйҙәребеҙ ҡалдырған төп нөсхәнән ситкә тайпылыуҙар, хаталар күп. Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ла, Сәрүәр Рәшит ҡыҙы ла ошо турала һүҙ ҡуҙғатып, хаталар өçтөндә эш башланыуы, йыл аҙағында был эшкә йомғаҡ яһаласағы тураһында хәбәр итте.

Был һөйләшеү республика райондарынан килгәндәргә генә түгел, Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сосновка райондарынан килгән ағинәйҙәр өсөн дә айырыуса фәһемле булды. "Беҙ, әлбиттә, Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты менән тығыҙ бәйләнештә торабыҙ, уларҙы үҙебеҙҙең сараларға саҡырабыҙ. Ә шулай ҙа бөгөн ысын мәғәнәһендә ең һыҙғанып ағинәйлек бурысын үтәгән ҡатын-ҡыҙҙар менән осрашыу, уларҙың эш-гәмәлдәрен күреү, кәңәштәрен ишетеү бик ныҡ файҙалы булды. Беҙ үҙебеҙҙе Башҡортостандың, башҡорт ҡатын-ҡыҙының бер өлөшө итеп тойҙоҡ, ошо тойғонан тулҡынланып илап та алдыҡ", - тине Силәбе өлкәһе ағинәйҙәре етәксеһе Рәбиға Фәрит ҡыҙы Бикбулатова үҙенең сығышында.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был көндә Баймаҡ район һабантуйы майҙанында булған һәр кем халҡыбыҙҙың талантын, рухи донъяһын, киң күңеллелек, ҡунаҡсыллыҡ өлгөһөн сағылдырған ошондай матур байрамды ойоштороусыларға рәхмәтле булғандыр. Республика ағинәйҙәре иһә үҙҙәренең ихлас рәхмәтен һабантуй сиктәрендә уларҙың йыйынын да ойоштороуға күп көс һалған район хакимиәте башлығы урынбаçары Гөлшат Сирғәлинаға, Баймаҡ биләмә-ара үҙәк китапханаһы коллективына һәм уларҙың етәксеһе Зилә Мортазинаға, Баймаҡ районы ағинәйҙәренә йүнәлтте. Әйткәндәй, республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының тәүге ойоштороу йыйыны ла үҙәк китапхананың элекке етәксеһе Луиза Дәүләтшина ярҙамында Баймаҡта үткәрелгәйне һәм ошо ил-йортҡа ҡот ҡайтарыусы, милләтебеҙ йолаларын, милләтебеҙ бәçен тергеҙеүсе, йәмғиәтебеҙ тормошона тәрбиәсе булараҡ килеп инеүсе ағинәйҙәр хәрәкәтенә старт бирелгәйне бит.**

**Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.**







ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘНГЕ АШ...

## аҡһымдан торһон

■ Әгәр ҙә баланы бер үк ваҡытта йоҡларға һалһаң, уның тән ауырлығын нормала тоторға мөмкин. Бындай режимлы үҫмерҙәрҙә һимереү йыш осрамай. Сәбәбе ябай: көн тәртибе шылып йөрөү һөҙөмтәһендә йоҡо туймау һимереүгә килтерә. Пенсильвания университеты хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, бала сәләмәт булһын өсөн уның йәшәү режимы булырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 5 йәшкә тиклемге 2 меңдән ашыу бала ҡатнашҡан. Уларҙы ҡайһы ваҡытта йоҡларға ятыуҙарына ҡарап төркөмдәргә бүлгәндәр. Һынауҙар 10 йыл буйына барған. Асыҡланыуынса, һәр өсөнсө бала ғына үҙ йәшенә тап килгән режим менән йәшәгән. Әгәр ҙә режим булмаһа, бала аҙыраҡ йоҡлаған һәм 15 йәшкә еткәс, унда һимереү күҙәтелгән. Педиатрҙар иҫкәртә: 5 йәшлек бала 18:45 һәм 20:15 ваҡыт арауығында йоҡларға ятырға тейеш. 12 йәшлек балаларға, мәҫәлән, 20:15-21:45 сәғәттә йоҡлау яҡшыраҡ.

■ Ошо уҡ университет белгестәре балаларҙың иртәнге ашында аҡһым мотлаҡ булырға тейеш, тип белдерә. Иртән углевод ашаһаң, тиҙерәк асығаһың һәм төшкө ашта күберәк ашайһың. Шуға ла иртән печенье ҡушып сәй эсеү ғәҙәтен ҡуйырға кәрәк. Тикшеренеүҙәрҙә 8-10 йәшлек балалар ҡатнашҡан. Иртән аҡһымдан торған ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүселәр углевод ашаусыларға ҡарағанда төш мәлендә яҡынса 4 процентҡа аҙыраҡ ашаған. Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар өсөн 4 процент бәләкәй һан түгел, ти белгестәр һәм баланың иртәнге ашына күберәк иғтибар бирергә саҡыра.

■ Гуэлф университеты белгестәре эндокрин һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһаған ризыҡтарҙы асыҡлаған. Йәшел һәм ҡыҙыл яҫы борсаҡты йышыраҡ ашарға кәрәк, тиғән фекерҙә улар. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың беренсе төркөмө дөгө һәм картуф менән туҡланған, икенсе төркөм картуф менән дөгөгә ҡушып яҫы борсаҡ ашаған. Ашарҙан алда һәм ашағандан һуң уларҙың ҡандағы шәкәр кимәле һәм ҡан баҫымы тикшерелгән. Икенсе төркөмдәң һөҙөмтәләре күпкә яҡшыраҡ булып сыҡҡан. Мәҫәлән, картуфтың үҙен генә ашағанда шәкәр кимәле ныҡ күтәрелә, ә яҫы борсаҡ ҡушып ашағандан һуң уның кимәле 35 процентҡа түбәнәйгән. Бынан тыш, яҫы борсаҡ холестерин кимәлен түбәнәйтә, ҡан баҫымын нормаға килтерә. Сөнки ул витаминдар һәм микроэлементтарға бай.

■ Раш университеты ғалимдары яңы диета уйлап тапҡан. MIND диетаһы тип аталған был диета когнетив тайпылыштарҙы (хәтер, аҡыл ҡеүәһенең һәм башҡа когнетив функцияларҙың түбәнәйеүе) булдырмаҫҡа ярҙам итә. 4,7 йыл дауам иткән һынауҙарҙа 960 өлкән йәштәге кеше ҡатнашҡан. MIND диетаһын тотҡандарҙың баш мейеһе 7,5 йәшкә йәшерәк булып сыҡҡан. Йәғни, улар был тайпылыштар менән башҡаса туҡланыусыларға ҡарағанда һуңғараҡ осрашҡан. Диета 15 компоненты үҙ эсенә ала. 10 төркөм аҙыҡ-түлек - мейе өсөн файҙалы, ә 5 төрлө ризыҡтан - ҡыҙыл иттән, майлы аҙыҡтарҙан, фастфудтан, майҙан һәм маргариндан, тәм-томдан баш тартырға кәрәк. Ғалимдар билдәләүенсә, сәләмәт булырға теләгән кеше көн һайын 3 порция ярма, йәшел япраҡлы йәшелсәләр ашарға тейеш. Ҡапҡылап алыу өсөн сәтләүектәр ҡулланылһын. Борсаҡ кеүек ҡуҙаҡлыларҙы көн аша ашарға кәрәк. Шулай уҡ аҙнаһына ике тапҡыр ҡош ите, еләктәр, балыҡты аҙнаһына бер тапҡыр булһа әҙерләү мөһим. Бынан тыш, көнөнә 1 балғалаҡ аҡ май рөхсәт ителә. Сырға килгәндә, ул көнөнә 1 порциянан артыҡ булырға тейеш түгел.

МОНОЛОГ

# "ЭСКЕСЕ БУЛЫП ТЫУМАЙҘАР, БАЛАМ..."

**...Мин - эскесе улы. Атайым иртән айыҡ, ә кискә лаяҡыл иҫерек. Ә уның эсмәгән көндәре беҙҙең өсөн оло байрамға әүерелә. Әсәйем, ҡартәсәйем, хатта сәңгелдәктә генә ятҡан һеңлем дә, был айыҡ көндәрҙе һағынып көтәбеҙ. Иртән мең тәүбәгә килеп аҙарынған атай, кисен йә ауа-түнә ҡайта, йә эҙләп алыуға ла ҡала башланы.**



Иҫемдә, сатлама һыуыҡ ғинуар төнө. Атай һаман эштән ҡайтмаған (ул колхозда мал врачы булып эшләй ине). Әҙләй сыҡтыҡ әсәй менән. Йығылып ятһа, тип тимер кәритәне һөйрәп киттек. Бер урамды ҡыҙырҙыҡ, икенсеһен, сәмәй һатҡан өй тирәләрен барлап сыҡтыҡ - юҡ. Ферма урамында ай яҡтыһында низер ҡарайып күренде. Ҡурҡа-өркә янына барҙыҡ. Ҡуйынына һаҫыҡ шешәһен ҡыҫтырып, атайым ята ине. Илалла менән һалам түшәүле кәритәгә тейәп (нисек көсөбөҙ еткәндер?), өйгә ҡарай атлайбыҙ. Аҙым һайын тиерлек туктап, әсәйем атайымдың тын алыуын тыңлай, башындағы шәлен сисеп, уға ябындырып ҡуйҙы бер мәл. Үҙе өшөй, йәл ине әсәй миңә. Түҙмәнем, юл ыңғайы һорай ҡуйҙым:

- Әсәй, бөтәһенең дә аталары эсмәй ҙә инде? Нишләп һин эскән атайҙы һайланың икән?

Әсәйемде һиҫкәндерҙе кеүек был һорауым:

- Ээйй, балам... Һуң уның ҡаҡ маңғайына "эскесе" тип яҙылмағайны бит! - тип әсенеп яуапланы.

... Хәтергә ныҡ уйылып ҡалған тағы бер күренеш. Класташ малайҙар менән мәктәптән ҡайтып киләбеҙ. Яҙ, йылы, сыуаҡ көн. Аяҡ аҫтында гөрләүектәр ағып ята. Атайымдың иң ҡыҙыу байрамы - үгеҙ-тәкә көйҙәрәү осоро еткәнен белә инем инде, тик магазин алдында бер өйкөм ирҙәр алдында тамаша күрһәтеүсе ул булыр тип уйламағайным да. Шыр ялангас быҫраҡ һыуға ауынаған атайым, бар халыҡты көлдөрөп, ҡыланып ҡылана. Ике йотом араҡыны ауыҙына уртлар өсөн бына ниндәй түбәнлеккә лә риза икән атайым! Малайҙар берсә атайыма, берсә миңә ҡарап, һындары ҡатып көлөшә башланы. Йән-фарман ҡайтып ауҙым өйгә, гәрләндем! Түгелеп иланым! Һүҙһеҙ ҙә аңлаған ҡартәсәйемдең баш осома килеп:

- Эй, балаҡай! Бер әҙәм дә донъяға эскесе булып тыумай шул. Йоғошло ауырыу кеүек ул эскелек. Йоҡтороуы йәһәт, ҡотолоуы ауыр. Ғибрәт өсөн генә тыуҙырып, буй биргәнмендер инде атаңа, һис һүҙемде тыңламай бит. Атай менән әсәйҙе алмаштырып, йә һайлап алып булмай шууул... - тип әсенгәне иҫтә...

... Араҡы талонға ғына, шәкәр ҙә самалап һатыла башланы бер мәл. Эске эҙләгәндәр ҡайҙандыр колхоз малы өсөн ҡайтарылған шәкәр сөгөлдөрө һығындыһын (патока тиҙәр ине) әсетеп эсеүгә өйрәнде. Шуны биҙрәләп самогонсы ҡатындарға ташып, алмашына градуслыһын ала ине улар. Аҙаҡ уныһы ла бөткәс, тәҙрә йыуыу шыйыҡсаһына ла күстеләр. Ҡайһы ваҡыт атай артынан ҡалмай эйәрә инем, әллә мин барында тыйылырмы, тип уйлағанмындыр инде. Ҡайҙа, нисек эскәндәрен теүәл белдем. Йомошон үтәгәненә әжер итеп, атайыма ҡырҡыу эҫле "тройной", хатта хушбуй ҙа тотторалар ине.

Аслы-туҡлы ашҡаҙанына был һыуҙар батмай башланымы, атайым бер көн сәсрәп ауырып йығылды. Йотом һыу ҙа үтмәй ауыҙынан, аҡтарылдырып тороп күм-күк, йә ут йәшел һаҫыҡ күперек ҡоҫа. Ирендәре күгәреп, тамам хәлһеҙләнгән атайымды урындыҡҡа һалып, ҡалайтып та иҫенә килтерә алмай өйрөләбеҙ. Әсәйемде ҡартәсәй фельдшерға йүгертте, үҙе атайҙың тәндәрен ыуғылап, ауыҙ эсенән низер уҡынып маташа. Фельдшер килмәне, әсәй, күҙ йәштәрен түгә-түгә, бер-ике апай һәм таныш түгел ағайҙы эйәртеп ҡайтты. Күҙҙәре аларып, тартышып ыңғырашҡан атайымды тотондолар "качать" итергә. Тәнен ыуырға спирт йә араҡы

ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ

# ҒҮМЕРҘЕ ҺАҠЛАП ҠАЛЫУҘЫҢ...

## ун өс миҫалы

**Ғәҙәттә, ниндәйҙер хәүеф килеп тыуһа, кеше албырғап ҡалыусан, контролде юғалтыусан. Әммә ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙе белгәндә, ғүмереңде һаҡлап ҡалырға мөмкин.**

♦ **Агрессив айыу менән осрашҡанда.** Ҡырағай тәбиғәттә, әлбиттә, айыуға осрамаҫҡа тырышырға кәрәк. Ләкин берәү ҙә киләсәген күҙаллай алмай. Шуға күрә, әгәр ҙә айыу менән осрашырға тура килһә, был хайуандың иң нескә ере - маневр икәнен иҫегеҙҙә тотоғоҙ. Айыуҙар шәп йүгерә, яҡшы шыуыша - был йәһәттән улар менән ярышыу мөмкин дә түгел, әммә ниндәйҙер объект, мәҫәлән, машина йәки ағас тирәләй йөрөү улар өсөн ауыр. Шулай әйләнеп йөрөй торғас, ул ҡасан да булһа был хәйләкәр "ем"дең сарыф ителгән көс хаҡына тормауын



аңлап, һеҙҙе ташлап китәсәк. Әммә айыу агрессия күрһәткәнгә тиклем ҡурҡырға ярамай. Әгәр ул һеҙҙе күҙәтә икән - тик тороғоҙ. Был осраҡта ул һеҙҙең кем булыуығыҙҙы һәм нимә эшләргә теләүегеҙҙе аңлай алмаясаҡ. Әгәр ашыҡмай ғына һеҙгә табан килә башлаһа, һеҙ ҙә яйлап ҡына китегеҙ. Айыуҙар кешегә бик һирәк һөжүм итә. Һеҙҙең кеше икәнлегегеҙҙе аңлағас, боролоп китеүе лә ихтимал.

♦ **Өйөгөҙҙә бер сәбәпһеҙгә балыҡ йәки бөүел еҫе** сыға башлап, уның сығанағын тапмаһағыҙ, был сымдарҙың иреүе һөҙөмтәһе булыуы ихтималлығын онотмағыҙ. Бындай хәл-торош янғынға, хатта шартлауға килтереүе мөмкин. Иң яҡшы ҡарар - сәбәбен асыҡлағанға тиклем электрҙы тулыһынса һүндереп тороу.

♦ Әгәр **диңгеҙҙә ағым эскә һөйрәй** икән, уға ҡаршы йөҙөргә тырышмағыҙ - бары тик көсөгөҙҙө генә сарыф

кәрәк ине, тигәндәрен ишетеп ҡалдым да, һабантуйға тип йыйған бар тинлектәремде усыма йомоп, киттем самогонсы әбейгә үҙ белдегем менән. Тинлектәремде сүпләп һанап алып, шешә төбөнә генә әлеге "әжәл һыуын" ҡойоп бирҙе әбей. Елтерәп ҡайтып еттем, атайым терелһен инде, тип! Бик оҙаҡ ыуалап, тағы әллә ниндәй әмәлиәттәр ҡылып, саҡ аяҡҡа баҫтырҙылар инде үлде тигән ерҙән атайымды.

Ошо терелеүҙән инде башҡаса эсмәҫ, тигәйнем, арыу уҡ ҡына эсмәй ҙә йөрөнө атай. Өҙҙөрәп гармунында уйнаһынмы, һыҒылтып бураһын бураһынмы, техника йүнәтһенме - барыһына ла оҫта, уға тиңе юҡ кеүек ине лә бит. Тик бер фәһем алмаған, алмай икән ул әҙәм тигәнең. Тағы ла эсә башланы. Колхоз аҡса түләмәй, эш хаҡын мал менән ҡайтарҙы ҡайһы саҡ, ә беҙгә тәгәйен мал, өйгә ҡайтып етмәй, самогонсылар ҡураһын тултырҙы. Мал йыһына бер бирелә, ә эскелек көн дә кәрәк шул атайға. Араҡы алдында бала хаҡы ла, ғаилә лә онотола, гәзиздәренең ризығын өҙгәс, оят әҫәре лә ҡалмай икән эскесе кешеләндә. Ғүмерҙә ҡыланмаған эшкә - уғрылыҡҡа ла этәрҙе атайҙы эскелек. Хужалыҡтың бығаҙуҙарын "шылдырған " атайҙы эшенән ҡыуып, штраф һалып ҡуйҙылар. Барыбер тыйылманы атайыбыҙ, өйҙән булһа ла ниҙер урлап, күнел асыуҙы хуп күрҙе. Илап ялбарған ҡартәсәйемдең күҙ йәштәре лә туктатманы уны... Иптәш малайҙарҙың аталары машина йөрөткәнендә, улдарын ат башына мендергәнендә көнләшеп ҡарарға ғына ҡалды минә...

Көҙөн колхоз келәтенән ашлыҡ урларға маташҡан атайҙы тотоп, бур исеме тағып, әсәйҙең яңғыҙ елкәһенә ҙур ғына штраф сәпәнеләр.

... Шул көндән эҙһеҙ юғалды беҙҙең атай. Эҙләмәгән, хәбәр итмәгән ер ҡалманы, әммә табылманы. Уны күргән-белгән кеше юҡ ине. Әйтерһең дә, ер йотто. Ҡәҙер кисендә ҡартәсәйем менән күк ҡабығы асылырын көтөп, атайға, тере булһа, ҡайтыуын теләгәнебеҙ ҙә иҫтә. Әгәр үлеп-фәлән ҡалған булһа тип, ҡартәсәйем уға, оҙон-оҙаҡ көйләп, "ясин" сығарҙы. Ҡуш усымды ҡуйып, илай-илай мин дә атайым рухына доға ҡылдым шул кисте...

... Урта мәктәпте тамамлап, әрмегә барып ҡайттым. Өмөт өҙөлмәй, ундабында һүҙ һала йөрөйөм. Яуап юҡ. Әҙәм энә түгел дә, кем булһа ла күрергә тейештер бит? Ҡартәсәйем атайымды көтөп ала алманы, ҡара ҡайғыһынан баҡыйлыҡҡа күсте. Атайҙың тереләгелен иҫбат итер, үле икәнлеген дәлилләр ҡағыҙ остоғо таба алмай ыҙаландыҡ. Мәктәптә уҡыған һеҙлемә пособие, үҙемә юғары уҡыу йортонда уҡыған ваҡытта стипендия түтәмәне. Ауыр ине тормошобоҙ, шулай ҙа бирешмәнек. Мин табип һөнәренә уҡып сыҡтым, ике йыл ҡалала эшләп алғас, өйләнергә уйланым. Күптән яратып йөрөгән ауылдаш ҡыҙға яусы ебәрҙек. Юл уңманы: "Ауылдың атаҡлы алкашының улына ҡыҙ бирәһебеҙ юҡ!" - тип, ҡырт бороп ҡайтарҙылар. Атайымдың ҡара исеменең ҡоһоро минең тормошома шулай ҡайтты...

Ҡалаға һыйындым, ауылдаштарымдың кеме осраһа ла, битемә бәреп: "Эй, һин теге бур улымы әле ул, алкаштан да духтыр тыуа икән дәбаһа", - тиер һымаҡ ине. Өйләндем. Тормоштар инде яйланды ғына тигәндә, әсәйем дә үлеп ҡуйҙы. Һеңлемде үҙем уҡытышып, кейәүгә бирҙем. Атайым ише айный алмай эскән атайҙар, сәсебашы туҙып, йәмһеҙләнгән ҡатындарҙы дауалаусы врач-нарколог мин. Һәр пациентым күҙҙәренән атайымдың төҫөн күрәм, тындарынан атайымдыҡылай һаҫыҡ еҫ бөркөлә. Аҙнаун көн эсендә мең тәүбәгә килеп, был тупһаны башҡа аша атламаҫҡа вәғәҙә биреп ҡайта ҡайһылары. Ҡабат-ҡабат бер үк вәғәҙәне ҡабатлағандар ҙа табылып-танылып тора...

... Ни өсөн яҙам мин был юлдарҙы? Бер көн дүрт йәшлек улым һорай ҡуйҙы: "Атай, нишләп һин балалар табибы түгел? Балаларҙыҡында стеналар матур һүрәтле, тәтәйҙәр күп, бала тауыштары яңғырай, ә һин эшләгән урын тимер тәҙрәле, стеналары ла төҫһөҙ, ишеү апай-инәйҙәр гел йәмһеҙ итеп ҡысҡыра, ярамаған һүҙҙәр әйтә..."

Әле барыһын теҙеп әйтһәм дә, һүҙем айышын аңламаҫһың шул, балам. Бәлки, ошо үрҙә яҙғандарым аша аҙағыраҡ аңларһың: бөхетле бала саҡ булһын өсөн, улыҡайым, атай-әсәйҙең дә һау аҡылда булыуы кәрәк шул.

... Эҙһеҙ юғалған атайымдан бер көн хәбәр килеп етте. Аяҡ-кулы туңып, дауаханала ҡырҡып алынған, енелсә фалиж һуҡҡан ҡарт бабайға әйләнгән атайымды өйөмә алып ҡайттым. Ҡарап тороуға имәнес йөҙлө атайымды инвалид креслоһына ултыртып, хас та теге саҡтағылай, кәритәгә һалып һөйрәгәндәй, тәрбиәмә алдым. Яйлап теле лә асылғандай булды, тәрбиәнән йөҙөнә нур керҙе. Ҡайҙа булғанлығын һөйләмәһә лә, аңлашыла ине: араҡы ҡоло тормошоноң касафаты ине был көнө. Бармаҡ сукһыҙ ҡул, тубыҡтан түбән ҡырҡылған аяҡ - хәҙер ҡайҙа теләй, шунда сығып китер әмәле юҡ, ни теләй, шуны эсә алмай. Мөлдөрәп күҙгә төбәлгән сабый ҡарашлы зәғифте йәлләп ҡуям. Ә мине атайым йәлләнеме икән бала сағымда? Әсәйемде? Ҡартәсәйемде?..

Көн оҙоно эштәмен, атай алдына күп итеп китап-гәзит һалып, телевизор тоҡандырып китәм. Бер көн ҡартәсәйемдән ҡалған ҡомартҡы сүрәләр китабын көйләп уҡыған атайыма таң ҡалдым. Шул тиклем килештереп көйләй, әйтерһең дә, ғүмере буйы эскесе булмаған, тик ус яҙып, бит һыпырыр әмәле генә юҡ. Тетрәндем, тәндәрем зымбырлап китте. Иманын юйғандың иманға кире ҡайтыуын күрҙем. Шунан һуң атайым менән һөйләшеп, эш урыныма алып барҙым үҙен. Юлдан яҙғандарға фәһемле вәғәздәрен һөйләп, эскелектең аҙағы яфалы тормош менән тамамланыуын үҙ миҫалында тартынмай һөйләне. Ысын күңелдән бирелеп һөйләгән атайым күҙҙәрендә үкенесле күҙ йәштәрен күреп, бик әсендем, әммә һуң, бик тә һуң ине шул унын иманға ҡайтыуы...

Мин - кисәге эскесе, бөгөн иманға әйҙәүсе атай улы. Алма ағасынан алыҫ төшмәй, тиһәләр ҙә, эскелеккә минең тормошомда урын юҡ. Бөхетле бала сағымды урлаған, ятраҡан ҡыҙымдан яҙҙырған, туған еремдән биҙҙергән эскелеккә мин ҡырҡа ҡаршы. Мин эскелекте күрә алмайым.

Улым! Әле тыумаған ейәнем! Һеҙгә минең кеүек: "Мин - эскесе улы", - тип һүҙ башларға яҙмаһын! Амин!

**Миңзәлә СИРГӘЛИНА-БОҪҠОНОВА әҙерләне.**

итәсәкһегеҙ. Ярға параллель рәүештә йөҙөгөҙ һәм ағымдан сыҡҡас, ҡоро ергә табан йүнәлеш алығыҙ.

♦ **Йөрәк өйәнәге ваҡытында бер төймә аспирин** хәлегеҙҙе яҡшыртасаҡ. Был осраҡта баш аҫтына берәй нәмә һалып ятырға йәки ултырырға, шунан дарыу ҡабырға кәрәк. Тиҙерәк тәьҫир итһен өсөн уны яҡшы итеп сәйнәү зарур.

♦ **Эҫе һуғыу билдәләре** булып башҡалары менән бер рәттән баш әйләнеү, күнел болғаныу тора, әммә улар башҡа сәбәптәр буйынса ла барлыҡҡа килеүе мөмкин. Ысынлап та эҫе һуҡҡанмы, юҡмы икәнлеген белеү өсөн берәй шәрбәтле ризыҡ, мәсәлән, кәнфит ашап ҡарарға кәрәк. Әгәр ул тәмһеҙ булып тойолһа - был эҫе ҡабыу һөҙөмтәһе. Йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлегендә тайпылыштар булған кешеләргә билдәләрҙе тиҙ арала асыҡлап, ваҡытында квалификациялы ярҙам алырға кәрәк.

♦ **Иҫтән яҙған кешене иҫенә килтереү өсөн** ябай ғына ғәмәлдәрҙе белеү ҙә етә: арҡаһына һалып, тубыҡтарын күкрәгенә тартырға кәрәк. Был осраҡта мейегә ҡан ағымы бара һәм иҫтән яҙыусы иҫенә килә. Әммә тәүҙә уның ҡәүҙәһендә, аяғында йәрәхәт юҡмы икәнен асыҡлау зарур, юҡһа, уның хәлторошон ҡатмарлаштырыуығыҙ ҙа ихтимал.

♦ **Ағыулы йылан саҡҡанда** ағыуҙы һурырға, һалҡын әйбер баҫырға, жгут һалырға, тешләнгән урынды өтөргә ярамай. Зыян күреүсене белгестәр ҡулына тапшырғанға тиклем уға күп итеп һыу, аллергияға ҡаршы дарыу эсергә кәрәк. Сағылған урынды тынысылыҡта ҡалдырығыҙ, юҡһа, ағыу тән буйлап тиҙ таралаcаҡ.

♦ **Һыуға батҡан кешене иҫенә килтергәс** тә уға бер хәүеф тә янамай тип уйламағыҙ - тиҙ арала дауаханаға оҙатығыҙ, сөнки үпкәһендә һыу ҡалған булһа, ул бер нисә тәүлектән һуң да вафат булыуы мөмкин.

♦ **Аварияға осрап, машинанан тәҙрә аша ғына сығыу** мөмкинлеге булһа, уны ортаһына түгел, ә ситтәренә һуғып ватыу еңелерәк икәнен онотмағыҙ. Әйткәндәй, әгәр ултырғыс башын тартып ала алһағыҙ, ул был эште башҡарыуҙы еңеләйтәсәк. Төрлө автомобилдә улар төрлөсә ҡуйыла, шуға алдан тикшереп ҡуйыу зыян итмәҫ.

♦ **Машинағыҙҙа һыу шешәһен ҡалдырмағыҙ**, әгәр уға ҡояш нурҙары тура төшһә, ул янғын сәбәпсеһе булыуы ла мөмкин. Был осраҡта шешә линза ролен үтәй һәм ҡояш нурын бер нөктәгә туплай. Бындай һауыттарҙы тәҙрәнән алыҫтараҡ һаҡларға, машинала ҡалдырмаҫҡа кәнәш ителә.

♦ **Аллергияға ҡаршы препараттарҙы** һәр саҡ үҙегеҙ менән йөрөтөгөҙ. Уйламаған нәмәгә ҡапыл аллергия башланыуы мөмкин. Әгәр көслө аллергия булһа, шунда уҡ ярҙам кәрәк буласаҡ. Был бигерәк тә сәйәхәт ваҡытында, ят деликатестарҙы ашап ҡарағанда, ят үҫемлектәр менән осрашҡанда бик актуаль.

♦ Пляжда һыу ғәҙәттәге сиктән бик йыраҡ була. **Океандың нык һайыҡҡан ере - яҡынлашҡан цунами билдәһе.** Шундай билдә күрһәгеҙ, ғәҙәттән тыш хәл тыуыу мөмкинлеге булған районда тиҙ генә барыһын да иҫкәртеп, был урындан тиҙерәк алыҫҡараҡ китергә кәрәк.

♦ **Өҫәү ҡағиҙәһе.** Ауыр хәлгә ҡалғас, уртаса статистика кешеһенең йәшәүгә һәләтен һүрәтләүсе күрһәткестәрҙе иҫегеҙҙә тотоғоҙ:

Кеше 3 минут тын алмай тора ала;

3 сәғәт экстремаль температураға сыҙай;

3 көн һыуһыҙ тора ала;

3 аҙна аҙыҡһыҙ йәшәй.

Өҫтөнлөктәрҙе дөрөҫ ҡуймағанда, йәшәү мөмкинлеге күпкә түбәнәйә.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

♦ Аквааэробика (һыуҙың ҡаршылығын еңеүгә йүнәлтелгән 20 минутлыҡ ритмик хәрәкәттәр комплексы) - йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын нығытыуҙың яҡшы ысулы.

♦ Һыу шейпингы мускулдарҙы нығыта һәм уларға теләгән форма бирә.

♦ Һыу йогаһы һәм көсөргәнештән арыныу - йөҙөү һәм тынс хәрәкәттәр шулай уҡ релаксация өсөн иң шәп мөхит булған һыуҙағы күнегеүҙәр комплексына инә.

## Быуындарығыҙҙы яҙығыҙ

Ҡартайғанға тиклем быуындарҙы сәләмәт килеш һаҡлау бик һирәк осраҡта ғына мөмкин. Ә сәләмәт булмаған быуындар көслө ауыртыуға дусар итә. Бынан тыш, быуын хәрәкәтһеҙ ҡала. Кеше иркен хәрәкәтләнә алмай, уға баҫҡыстан менеүе лә, ҡайҙалыр барыуы ла ауыр. Хәрәкәтһеҙлек ауыртҡан быуындың деградацияһына килтерә, билдәле көсөргәнеш булғанда кимерсәк тә боҙола.

Көс күнекмәләре, мускулдарҙы нығытыу һәм юртаҡлап йүгереү был осраҡта ярҙам итмәй. Бары тик быуындарға артыҡ көсөргәнеш тыуҙырмаған күнегеүҙәр генә файҙалы. Улар оҙаҡ (көнөнә бер нисә тапҡыр) һәм минималь хәрәкәт менән эшләнә. Был осраҡта туҡлыҡлы матдәләр ышҡылыу урынына килтерелә һәм быуындарҙың боҙолған урыны элекке хәленә ҡайта. Бер-ике ай шундай күнекмәләр, ғәҙәттә, хәрәкәтсәнлекте кире ҡайтарыу һәм быуындар ауыртыуын туҡтатыу өсөн етә. Уларҙың бер нисәһен һеҙгә лә тәҡдим итәбеҙ.

**1-се күнегеү.** Таяуға тотоноп, еңелсә генә сүгеп ултырығыҙ. Уларҙы беренсе ауыртыу тойғоһона тиклем эшләгеҙ. Көнөнә ике тапҡыр 5-10-ар минут тәнәфескә туҡтап-туҡтап ҡабатлағыҙ, киҫкен ауыртыуға юл ҡуймағыҙ.

**2-се күнегеү.** Иҙәнгә ултырығыҙ, аяҡтарығыҙҙы еңелсә ауыртыу барлыҡҡа килгәнсе һуҙығыҙ. Аяҡтарығыҙҙы ҡосаҡлап, ҡулдарығыҙ менән ярҙам итеп, алғаартҡа бәүелегеҙ. Ауыртыу барлыҡҡа килгәнгә тиклем көнөнә 2-3 тапҡыр 3-әр минут эшләгеҙ. Иң аҙаҡтан арҡағыҙҙа артҡа бөгөлөгөҙ.

## Йога менән шөғөлләнегеҙ

Йога менән шөғөлләнеүселәр сәләмәт, тура һынлы, көслө, юғары эш һәләтенә эйә һәм гармониялы тормошта йәшәй. Йога тәнең менән идара итергә өйрәтә, дөрөҫ һын булдырырға, һығылмалылыҡҡа ярҙам итә; ҡанда һөйәктәрҙә кальцийҙың тупланыуына ҡамасаулаған стресс гормоны кимәлен кәметә һәм остеопороз барлыҡҡа килеүен иҫкәртә; көсөргәнештән дөрөҫ арынырға өйрәтә, кире ғәҙәттәрҙән һәм артыҡ килограмдарҙан арындыра; тын алыу һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеген көйләй, ҡан баҫымын, пульс һәм тын алыу йышлығын кәметә. Спорт ҡорамалдары ла, хатта аяҡ кейеме лә кәрәкмәй - йога менән ялан аяҡ, ҡайҙа уңайлы - шунда шөғөлләнәләр.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 17 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.15 "Сегодня 17 июня. День начинается". [6+]
9.50, 2.20, 3.05 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 4.00 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.25 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ангел-хранитель". [16+]
23.30 "Познер". [16+]
0.30 Т/с "Город". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ведьма". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Х/ф "Место встречи изменить нельзя". [12+]

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**18.00 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**19.00, 22.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Х/ф "Ненормальная". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Среда, среда". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 18 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.15 "Сегодня 18 июня. День начинается". [6+]
9.50, 2.00 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 3.50 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ангел-хранитель". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге. [16+]
0.00 Т/с "Город". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ведьма". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Х/ф "Место встречи изменить нельзя".

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 Пером и оружием. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 С мотором... [12+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 "Честно говоря". [12+]**
**22.30 Тайм-аут. [6+]**
**23.15 Күстәнәс. [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Х/ф "2307: Операция "Андроид". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Убей меня, голубчик". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 19 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.15 "Сегодня 19 июня. День начинается". [6+]
9.50, 2.00 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 3.50 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ангел-хранитель". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге. [16+]
0.00 Т/с "Город". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ведьма". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Х/ф "Место встречи изменить нельзя". [12+]
3.40 Д/ф "В гости к Богу не бывает опозданий". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 23.15 Бала-сағa. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**0.00 Х/ф "Дикое поле". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]**
**4.30 Весело живем. [12+]**
**5.00 Д/ф "Узаман". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 20 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
10.10, 2.10 "Модный приговор". [6+]
11.00 "Жить здорово!" [16+]
12.25, 17.15 Время покажет. [16+]
13.30, 17.00 Новости с субтитрами.
14.00 Прямая линия с Владимиром Путиным.
20.00 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ангел-хранитель". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге. [16+]
0.05 Т/с "Город". [16+]
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.50 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 13.00, 20.00 Вести.
11.50, 17.00 "60 минут". [12+]
14.00 Прямая линия с Владимиром Путиным.
19.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ведьма". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Х/ф "Поцелуев мост". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 Пером и оружием. [12+]**
**11.45 По сути дела... [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Краски войны. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 С мотором... [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**23.15 "Песня года". [12+]**
**23.45 Современник. [12+]**
**0.00 Х/ф "Пальмы в снегу". [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Бала кунеле далала". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 21 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 4.50 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 4.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.50 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Три аккорда". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге. [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Анна Ахматова. Вечное присутствие". [12+]
2.00 Х/ф "Жюстин". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Х/ф "Сила обстоятельств".
1.00 Х/ф "Кукушка". [12+]
4.05 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 Д/ф "Истории Победы". [0+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Д/ф "Узаман". [12+]**
**14.00 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**14.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.30 Пленарная секция Всероссийского инвестиционного сабантуя "Зауралье-2019".**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета Башкортостан". [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 У дачи. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00, 4.00 Х/ф "Франц и Полина". [16+]**
**2.00 Спектакль "Песнь о любви". [12+]**
**6.00 Д/ф "Недельное. Первые километры войны". [12+]**

## 22 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.35, 6.10 Т/с "Восхождение на Олимп". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.50 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.35 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10 Д/ф Премьера. "Чернобыль. Как это было". [16+]
11.10 "Честное слово" с Юрием Николаевым. [12+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Теория заговора". [16+]
13.10 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
16.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.30, 21.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
23.00 Х/ф Премьера. "72 часа". [12+]
1.00 Х/ф "Рокко и его братья". [16+]
4.20 "Давай поженимся!" [16+]
5.00 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Чужие дети". [12+]
13.45 Х/ф "Бабье царство". [12+]
17.40 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Два берега надежды". [12+]
1.25 Д/ф "Их звали травники". [12+]
2.40 Х/ф "Сорокапятка". [12+]

### БСТ

**7.00 "Вечная память..." Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**8.45 Д/ф "Вся жизнь - мечта". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 "Физра". [6+]**
**9.45 "Перекличка". [6+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 МузКәрәҙ. [0+]**
**10.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.45 Күстәнәс. [6+]**
**11.15 Хазина о Хазине. [0+]**
**11.45 Тайм-аут. [6+]**
**12.00 Первый турнир Терра Башкирия по конному спорту в честь 100-летия Республики Башкортостан. V этап. [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "Телевидение - жизнь моя". [12+]**
**17.45 "Туганлык-2019". [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.30, 1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.00, 5.00 Х/ф "Блаженная". [16+]**
**2.15 Спектакль "Семь девушек". [12+]**
**3.30 "Песня года". [12+]**
**4.00 Д/ф "Война народная. Ополчение". [12+]**

## 23 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.35, 6.10 Т/с "Восхождение на Олимп". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.10, 12.15 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.50 Премьера. "Камера. Мотор. Страна". [16+]
14.25 Премьера. "Тодес". Праздничное шоу в Государственном Кремлевском дворце. [12+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Премьера. "Семейные тайны" с Тимуром Еремеевым". [16+]
19.25 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.40 Д/ф Премьера. "Владимир Шахрин. "Жить надо в "Чайф". [12+]
0.45 Х/ф "Особо опасен". [18+]
2.45 "Модный приговор". [6+]
3.40 "Мужское / Женское". [16+]
4.20 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

4.15 Х/ф "Кровь не вода". [12+]
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
13.55, 2.00 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
15.00 "Выход в люди". [12+]
16.00 Х/ф "Надломленные души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Х/ф "Алые паруса". [12+]
23.30 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.05 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "Песня года". [12+]**
**10.00 Бирешмә. Профи. [6+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [0+]**
**12.00 Бай баҡса. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Весна Победы". [12+]**
**17.45 "Навруз-2019". [12+]**
**18.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00 Республика Live. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.15, 4.15 Х/ф "Восточная сказка". [16+]**
**2.00 Спектакль "Чужой ребенок". [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Июнь (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (14) дүшәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 18 (15) шишәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 19 (16) шаршамбы | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 20 (17) кесе йома | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 21 (18) йома | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 22 (19) шәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 23 (20) йәкшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

**✓ Көтөүсе муҡсаһын халыҡта ярут йәки ҡош күмәсе тип йөрөтөлгән ҡый үләне менән бутауы еңел. Көтөүсе муҡсаһының тамырына яҡын япраҡтары бәпембә япрағын хәтерләтә, ә ярут үләне япраҡтары оҙонса һәм киртләсһеҙ.**



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# САЛАУАТТЫ КЕМДӘР ҺЫНЛАНДЫРА?




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**23-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡолой. Боролош. Төтөн. Ҡарат. Ҡараҡ. Әжәл. Ра. Робот. Нурия. Әй. Өкө. Акр. Дау. Кинйә. Рота. Каса. Юлдар. Лилиә. Ҡат. Йөгаяҡ. Алтын. Румыния. Әхлаҡлы.

**Вертикаль буйынса:** Ғәйзулла. Ҡараһаҡал. Бөйрәкәй. Бала. Өйөрмә. Тәтәй. Ҡорот. Диана. Яҡтыға. Төлкөсура. Оби. Йәшен. Яңы. Ҡан. Каюта. Угги. Инәй. Ҡая. Әкрен.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЕҢЕЛЛӘШТЕРЕЛДЕ

**Рәсәйҙә инвалидлыҡты билдәләү өсөн медик-социаль экспертиза үткәреү тәртибе үҙгәрҙе. Министрҙар кабинеты сайтында хәбәр ителеүенсә, хәҙер медик-социаль экспертизаға йүнәлтмәне медицина ойошмаһы медик-социаль экспертиза бюроһына инвалид ҡатнашлығынан тыш электрон документ формаһында тапшыра.**

Бөгөнгәсә граждандар инвалидлыҡты билдәләү өсөн медик-социаль экспертизаға медицина ойошмаларына, шулай уҡ пенсия тәьминәтен тормошҡа ашырған органдарға, халыҡты социаль яҡлау органдарына ебәрелә ине. Хөкүмәт ултырышында премьер-министр Дмитрий Медведев билдәләүенсә, инвалидтар инстанциялар буйлап йөрөмәһен, өҫтәмә ҡағыҙҙар йыймаһын, бөтәһен дә дәүләт хеҙмәттәре порталы аша эшләргә мөмкин булһын өсөн документтар менән электрон алмашыуға этаплап күсеү башлана. Хәҙер Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәрҙең берҙәм порталы аша электрон төрҙә медик-социаль экспертиза актының күсермәһен, медик-социаль экспертиза уҙғарыу протоколын алыуға һорау ебәреү, шулай уҡ медик-социаль экспертизаның беренсел һәм баш бюроһы ҡарарҙарына ялыу яҙырға ғариза биреү мөмкинлеге билдәләнә.

# ҠАҒИҘӘЛӘР ҮҘГӘРӘ

**Рәсәйҙә мотлаҡ медицина страховкаһы ҡағиҙәләре үҙгәрҙе. Уға ярашлы, поликлиникалар сирҙәрҙе профилактикалау буйынса эшмәкәрлеген көсәйтәсәк.**

Алдағы ике йылда барлыҡ рәсәйҙәр ҙә диспансеризация үтергә һәм һуңынан уларҙың һәр береһенә сәләмәтлек төркөмө бирелергә тейеш. Әгәр кемдәлер хроник сир булыуы асыҡланып, уға даими табип күҙәтеүендә булыу талап ителһә, уны диспансер күҙәтеүенә аласаҡтар. Ундай категория медицина тикшереүен йылына бер нисә тапҡыр үтәсәк. Ул хатта тикшерелергә оноткан осраҡта ла, медучреждение вәкилдәре үҙҙәре һәм ОМС полисы биргән страховка компанияһы вәкилдәре иҫенә төшөрәсәк. Бынан тыш, страховка компаниялары граждандарҙың мөрәжәғәттәре буйынса ла эшләргә, бәхәсле мәлдәр килеп тыуғанда уларҙы хәл итергә ярҙам итергә бурыслы. Әгәр пациенттың үткәрелгән тикшереү һәм дауалау сифаты буйынса шиге тыуа икән, страховкалау вәкилдәре күрһәтелгән хеҙмәттәргә экспертиза билдәләйәсәк.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ИЮНЬ АЙЫНЫҢ ШИФАЛЫ ҮЛӘНДӘРЕ

Июндә май айы үләндәренең ҡайһы берҙәрен йыйыуҙы дауам итергә кәрәк. Бынан тыш был айҙа вербена (лекарственная), һыу боросо (горец перечный), күгүлән, һары ҡандала үләне (донник лекарственный), тиле кишер (дымянка лекарственная), ҡуян үләне (кислица обыкновенная), ҡырҡколас (кровохлебка лекарственная), үрмәле лютик, һабын үләне, ҙур настурция, ҡарһаҡ үлән (очанка лекарственная), арыҫлан ҡойроғо (пустырник сердечный), кипкәр (сушеница топяная), ирен сәскә (чистец лесной) үләнен; вахта (вахта трехлистная), айыу көпшәһе (дягиль лекарственный), уҫаҡ, петрушка үләне, юл япрағы (подорожник большой), күгән (тёрн), муйыл, шалфей (лекарственный) япрағын; бесәйтабандың (кошачья лапка двудомная) сатыр сәскәлеген һәм һуҡыр кесерткәндең сәскәһен; һоло, ҡуян кәбеҫтәһе (очиток едкий), шайтан таяғы (татарник колючий) ер өҫтөндәге өлөшөн йыйып алырға. Әлбиттә, июнь айында әҙерләнгән дарыу үләндәре исемлеге быны менән генә бөтмәй.

## Көтөүсе муҡсаһы

Был ҡый үләне бөтә ерҙә үҫә, әммә уны йолҡоп ташларға ашыҡмағыҙ - ул шифалы. Көтөүсе муҡсаһы составында К витамины күп, шуға ла ул ҡан туҡтата торған иң яҡшы сара. Был үләнде аналыҡ (матка), үпкә һәм ашҡаҙандан ҡан китеүҙән, геморрой, йәрәхәт, сей яра, күгәргән урындарҙы дауалауҙа ла ҡулланалар. Шулай уҡ, көтөүсе муҡсаһынан эшләнгән препараттар аналыҡ һәм эсәктәрҙең шыма мускулдары тартылыуына булышлыҡ итә, ситтәге ҡан тамырҙарын тарайта. Үләндән эшләнгән төнәтмә, ҡайнатма һәм настойка ауырттырып килгән күрем мәлендә, цистит, тоҙ алмашыныуы боҙолған, климаксты ауыр кисергәндә ҡулланыла.

Көтөүсе муҡсаһын сәскә атҡан мәлдә йыялар, шуға көҙгә тиклем әҙерләргә була. Ҡоро көндә йыйырға кәрәк, үлән дымлы булырға тейеш түгел. Үләндең өҫкө өлөшөн 40 см тирәһе буйлыҡ итеп ҡырҡып алалар, ботағында сәскәһе, япраҡтары, өлгөрөп етмәгән емештәре лә инеп китә. Көтөүсе муҡсаһында аҡ таптар булһа, тимәк бәшмәк төшкән һәм ундай үләнде йыймаҫҡа. Көтөүсе муҡсаһын халыҡта ярут йәки ҡош күмәсе тип йөрөтөлгән ҡый үләне менән бутауы еңел, шуға иғтибарлы булырға кәрәк. Көтөүсе муҡсаһының тамырына яҡын япраҡтары бәпембә япрағын хәтерләтә, ә ярут үләне япраҡтары оҙонса һәм киртләсһеҙ. Был ике үләндең айырмаһы тағы ла шунда: көтөүсе муҡсаһының орлоҡ ҡуҙаҡтары йөрәк формаһында, ә яруттыҡы түңәрәгерәк. Йыйылған көтөүсе муҡсаһын йәймәгә йоҡаҡ ҡына итеп таратып күләгә урында, яҡшы елләтелгән урында киптерәләр. Онтаҡлағанда үләне 2 проценттан, тамырынан айырылмаған һарғайған япраҡтары 3 проценттан артмаҫҡа тейеш. Киптерелгән үләнде ҡағыҙ йә туҡыма муҡсала ҡоро, һалҡын урында 2-3 йыл һаҡларға була.

Көтөүсе муҡсаһында ағыулы матдәләр юҡ, шуға киптерелмәгән көйө салатҡа ҡушырға мөмкин.

**Ҡан ағыуҙы туҡтатыу өсөн** төнәтмәне ике-өс көн дауамында көнөнә өс тапҡыр бер ҡалаҡ итеп эсергә. Ул күрем циклын нормалләштерә, бала тапҡандан һуң организмды элекке хәленә ҡайтара. Төнәтмәне әҙерләү өсөн бер ҡалаҡ көтөүсе муҡсаһын ваҡлап кәстрүлгә һалырға һәм өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә.

**Түлһеҙлек.** Әгәр ҙә түлһеҙлек ҡатын-ҡыҙҙың репродуктив системаһында шешеү процессы барыу сәбәпле булһа, махсус үлән төнәтмәһе ярҙам итеүе бар. Төнәтмәне ашарҙан 40 минут алда 1 стакан эсергә. Дауаланыуҙы күрем килерҙән 5 тәүлек алда башларға кәрәк, күрем башланыу менән туҡтатырға. Шул рәүешле 5-6 дауаланыу курсы үтергә. Төнәтмәне әҙерләү тәртибе: берешәр ҡалаҡ бәпембә тамыры, туҡранбаш, көтөүсе муҡсаһы, календула, кесерткән (жгучая) үләндәрен бергә ҡушып, 1,5 литр һыуыҡ һыу ҡойоп яй ғына утта 5 минут ҡайнатырға. Шунан 3 сәғәт төнәтергә, һөҙөп алырға. Төнәтмәне литр ярымлыҡ банкаға ҡойоп, быуға әйләнгән өлөшөн тулыландырып, ҡайнатып һыуытылған һыу өҫтәргә. Төнәтмәне эскәндә эстең аҫҡы өлөшөндә һыҙлау тойғоһо барлыҡҡа килеүе бар, еңелсә генә ауыртыуы ҡурҡыныс түгел.

**Сәс ҡойолғанда.** Ҡайнатма менән сәс төбөн көнөнә ике тапҡыр ыуырға кәрәк. Уны әҙерләү өсөн 25 г көтөүсе муҡсаһына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, һауытты һыулы кәстрүл эсенә ҡуйып 20 минут ҡайнатырға. Шунан һуң ҡайнатманы 45 минут төнәтеп, һөҙөп алырға. Был сараның шифаһы 2 тәүлек кенә һаҡлана.

***Иҫкәртеү:** ҡандың ойошоусанлығы юғары булғанда, шәхсән түҙә алмаҫлыҡ, йөклө булғанда, тромбофлебит, имеҙгәндә, күрем аҙ килгәндә ҡулланырға ярамай.*

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# "ЕВРАЗИЯ ЙӨРӘГЕ" ТАМАШАЛАРЫ

**Өфөлә барған "Евразия йөрәге" V Халыҡ-ара сәнғәт фестивале бөгөн ҙур гала-концерт менән тамамланасаҡ. 2013 йылдан алып үткәрелгән "Евразия йөрәге" өфөләрҙең һәм баш ҡала ҡунаҡтарының иң яратҡан мәҙәни сараһына әүерелеп өлгөрҙө. Тәүге йылда 10 мең тамашасы йыйылһа, былтыр 130 мең кеше Өфө амфитеатрында тамаша ҡылған. Ойоштороусылар билдәләүенсә, быйыл тәүге кистә генә лә асыҡ һауала барған был байрамға 45 меңдән ашыу кеше килгән. Шуныһы ҡыҙыҡ, All fests порталы мәғлүмәтенә ҡарағанда, "Евразия йөрәге" фестивале Рәсәйҙә популярлығы буйынса икенсе урында тора.**







Фестивалдең тәүге көнө Милли кейем парады менән хәтерҙә ҡалды. Былтыр Өфө ҡалаһы милли кейемдәрҙәге иң ҙур әйлән-бәйлән менән рекорд ҡуйғайны. Унда 1192 кеше теркәлгәйне. Быйыл милли кейемдә урамға сығыусылар тағы ла күберәк булды, махсус теркәлеү үткәндәр иҫәбе генә лә 2700-ҙән ашып китте. Сағыу кейемдәрҙәге колонналар Зәки Вәлиди урамынан Өфө амфитеатрына тиклем йөйөү үтте. Унда республика райондары һәм ҡалалары вәкилдәренән тыш, Мәскәүҙән, Ырымбур өлкәһенән, Пермь крайынан, Ханты-Манси автономлы округынан башҡорт ҡоролтайҙары ағзалары ҡатнашты. Төп сәхнә алды ҙур бейеү майҙансығына әүерелде.

Был көндө концерт программаһын Санкт-Петербургтан килгән "Ingervala" төркөмө асты. Уларҙы Надежда Бабкинаның "Рәсәй йыры" XII Бөтөн Рәсәй фестиваль-марафоны дауам итте. Әйткәндәй, быйыл был фестиваль-марафон бары тик Башҡортостанда ғына үтә һәм республикабыҙҙың 100 йыллығына бағышлана. Һуңынан эстафета "Арғымаҡ" этно-рок төркөмөнә тапшырылды.

13 июндә "Симфоник төн"дә Башҡортостан Республикаһының Милли һәм Йәштәр симфоник оркестрҙары билдәле яҡташыбыҙ Аҫҡар Абдразаҡов, "Яңы опера" Мәскәү театры солистары Ольга менән Елена Терентьевалар, шулай уҡ Японианан килгән ҡунаҡтар Сэйити Фурукава менән Наталья Юрканова өсөн уйнаны. Был көндө шулай уҡ ижади коллективтар, шулай уҡ Эске эштәр министрлығы Юридик институты курсанттары, Өфө мәктәптәре уҡыусылары ҡатнашлығында бейеү байрамы - Беренсе бал үтте.

14 июндә "Алға, Башҡортостан!" тип аталған концерт ойошторолдо. Унда Алсу, Рушана Вәлиева, Софья Бугера, Элвин Грей, "Бүреләр", "Заман" төркөмдәре, Роберт Юлдашевтар сығыш яһаны. Әйткәндәй, был концерттың ҙур өлөшө "Курайфест" форматында үтте. Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова алдан уҡ сараға 500 ҡурайсы киләсәге тураһында хәбәр иткәйне.






# ҠУМЫҘСЫЛАР ЙЫЙЫЛА

**19-20 июндә Башҡортостанда "Әй ауазы" Төбәк-ара ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр конкурсы ойошторола. Рәсәй Президенты грантына уҙғарылған был сара башҡорт халыҡ уйын ҡоралдарында уйнау традицияларын һаҡлауға, тергеҙеүгә һәм артабан үҫтереүгә, һәләтле башҡарыусыларҙы асыҡлауға йүнәлтелгән.**

Конкурс Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына бағышланған. Ижади бәйге Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ ауылында була. Республика халыҡ ижады үҙәге матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ҡатнашыуға өҙләүселәр, ҡумыҙсылар, шулай уҡ ҡумыҙсылар ансамблдәре саҡырыла. Конкурс ике турҙа, ике йәш категорияһында бара: 16 йәшкәсә һәм 16 йәштән өлкән. Конкурс барышында жюри ағзалары - күренекле мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, сәнғәт оҫталары ҡатнашлығында түңәрәк өҫтәл ойошторола. Төбәк-ара ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр конкурсының иң оҫта башҡарыусылары, шулай уҡ сара ҡунаҡтары менән тантаналы концерт көтөлә. Төбәк-ара ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр конкурсы - Башҡортостанда ғына түгел, унан ситтә лә әһәмиәтле сараларҙың береһе. Төрлө йылдарҙа конкурс Саха (Якут), Татарстан, Хакасия республикаларынан, Пермь, Һамар һәм Свердловск өлкәләренән башҡарыусылар йыйҙы. Ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Мәсетле районы хакимиәте. Ғаризалар Мәсетле районы, Оло Ыҡтамаҡ ауылы, Ленин урамы, 19, район мәҙәниәт йорто, e-mail: mechkultura@mail.ru, (34770) 2-10-94 телефоны; Өфө ҡалаһы, Зәйнәб Биишева урамы, 17/2, Республика халыҡ ижады үҙәге, e-mail: gukrcnt@mail.ru, 8 (347) 289-65-50 телефоны буйынса ҡабул ителә.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАЛАНЫҢ ТАУЫҒЫ БУЛҒАНСЫ,

## ауылдың әтәсе бул!

Тауыш сығарған тура һүҙҙән татыулаштырған ялған хәйерле.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хакимдарҙың аҡылы тураһында уның әйләнә-тирәһендә тупланған кешеләргә ҡарап фекер йөрөтәләр.

**(Никколо Макиавелли).**

Олатай булыуым мине борсомай, ә бына ҡатынымдың өләсәйгә әйләнеүе генә ҡыйын.

**(Граучо Маркс).**

Әлбиттә, аҡсанан да мөһимерәк әйберҙәр ҙә бар донъяла, әммә ул әйберҙәрҙе бит аҡсаһыҙ алып булмай.

**(Проспер Мериме).**

Яҡшы матбуғат баҫмаһы - ул милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүе.

**(Артур Миллер).**

Ҡала - джунгли түгел, ә кешеләр зоопаркы.

**(Десмонд Моррис).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Донъяуи ғилемгә һыуһаған бер йәш кеше бер аҡыл эйәһенә килә һәм һорауҙары менән мөрәжәғәт итә. Ул ун һорау бирә аҡһаҡалға һәм ун яуап ала. Тәүге һорау шулай була:**

**- Донъяла кемдәр күберәк: тереләрме, үлеләрме?**

**- Тереләр, - тип яуаплай аҡыл эйәһе, - сөнки үлеләр был донъяла йәшәмәй.**

**Икенсе һорау:**

**- Хайуандарҙы нимә аҫырай: ерме, диңгеҙме?**

**- Диңгеҙ. Сөнки ер үҙе донъя океанында бер утрау.**

**- Ниндәй хайуан иң хәйләкәре? - Өсөнсө һорау шулай яңғырай.**

**- Кеше күҙенә салынмағаны.**

**Дүртенсе һорау:**

**- Ни өсөн һеҙ яуызлыҡ менән көрәшергә көнәш итәһегеҙ?**

**- Данға күмелеп йәшәр һәм данға күмелеп донъя ҡуйыр өсөн.**

**- Иң тәүҙә нимә булған: көнмө, төнмө?**

**- Көн бер көнгә алдараҡ булған.**

**- Ауыр яуап! - тип ҡысҡырып ебәрә шунда йәш кеше.**

**- Ауыр һорауға ауыр яуап, - ти аҡһаҡал.**

**Алтынсы һорау:**

**- Нисек һөйөү ҡаҙанырға?**

**- Иң көслө бул, иң ҡурҡыныс булма.**

**Етенсе һорау:**

**- Нимә көслөрәк: йәшәүме, үлемме?**

**- Йәшәү. Сөнки унда газаптар күберәк.**

**Һигеҙенсе һорау:**

**- Кеше ҡасан үлергә тейеш?**

**- Үлем йәшәүгә ҡарағанда яҡшыраҡ тойолғанда.**

**Ҡалған ике һорауҙы тарих һаҡламаған..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 14 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 477